ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 июль (майай) 2024

№26 (1119)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт шихандары...**

палеонтология хазинаһы улар



7

**Алтынсы интеграл һәм...**

ҡурай, ҡымыҙ, башҡорт теле тураһында



8-9

**"Көс урыны" фильмы...**



11

**Башҡорт аҫалы балаҫы**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Тормоштоң ҡаты һынауына тарымаҫ, тәрән упҡынына тәгәрәмәҫ өсөн кеше хаҡы ашауҙан, артыҡ мал алыуҙан һаҡланыу хәйерле.***

***(Ағинәй һүҙе).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Рәсәйҙә уҡыусының мәктәптәге тәртибенә баһа ҡуйыуҙары мөмкин. Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет етәксеһе Валерий Фадеев шундай тәҡдим менән сығыш яһаны. Ул шулай уҡ тәртибе насар булған уҡыусыларҙы сығарылыш имтихандарына индермәҫкә саҡырҙы. Ә һеҙ был турала ниндәй фекерҙә?***

***Бәҙри ӘХМӘТОВ, педагог-психолог:*** Минә совет осоронда ла, унан һуң да мәғариф системаһында байтаҡ йылдар эшләргә насип булды. Училищела, вузда, балалар йортонда, ПТУ-ла, мәктәптә. Әлбиттә, һәр ҡайҙа ла тәртибе буйынса педагогтар ҡуйған талаптарҙы үтәмәгән уҡыусылар, студенттар була. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шулай. Совет осоронда уҡыусының тәртибе өлгөлө, йә иһә ҡәнәғәтләнерлек тип баһаланды. Өлгәшмәгән һәм тәртибе насар булғандарҙы, уҡырға теләмәгәндәрҙе лә уҡыттылар бит - закон буйынса барса бала ла иң кәмендә тулы булмаған урта белем алырға тейеш ине. Ул, белеүегеҙсә, "всеобуч" тип аталды.

Һүҙ барған тәҡдимде "Президент ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет" рәйесе ауыҙынан ишетеү аяныс. Был беҙҙең тәрбиә системаһында күрсөккә тиң хәл: ауыр холоҡло балаларҙы тәрбиәләп булмай тип, ҡул күтәреү ошолор. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, хатта ки енәйәт ҡылып, колонияға ебәрелгән үҫмерҙәрҙе лә уҡыталар. Күрәһең, хәҙерге хоҡуҡ һаҡсылары Антон Семенович Макаренконың донъя кимәлендә танылыу тапҡан педагогик системаһы хаҡында бер ни ҙә белмәй. Иҫегеҙгә төшөрәм: уның тәрбиәләнеүселәренең барыһы ла йәш енәйәтселәр булған! Макаренко системаһында тәрбиә алып, улар ысын совет граждандары булып киткән.

Балалар тәртибенә баһа биреү ҙә кәрәк, тәртибе насар булғандарҙы төҙәтә алыу ҙа кәрәк. Был - педагогика ҡануны. Әммә, уҡыусының тәртибе насар булыуға һылтанып, бала хоҡуҡтарын сикләү Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына ҡаршы килә. 18 йәшкә тиклемге һәр кем бала тип һанала. Уҡыусы, тәртибе буйынса ниндәй генә булмаһын, яҡлауға мохтаж. Ул ысын, һөҙөмтәле тәрбиә һәм белем алыу хоҡуғына эйә. Тәртибенә ҡарап, уҡыусыны (баланы) сығарылыш имтихандарынан мәхрүм итеү - ул репрессив ысул. Балалар психологы булараҡ, бына ни әйтер инем: дөйөм белем биреү системаһына ошондай ҡағиҙә индерелһә, был хоҡуҡтары сикләнгән уҡыусыла нәфрәт тойғоһо ғына уятасаҡ. Мин шәхсән "РФ Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары советы" етәксеһе Валерий Фадеевтың тәҡдименә ҡырҡа протест белдерәм: кеше хоҡуҡтарын яҡлаусы орган ошо хоҡуҡтарҙы боҙоусыға әүерелмәһен, тим.

## БАШ ҠАЛАМ

**450 йыллыҡ тарихы булған Өфөбөҙ, башҡа миллионлы ҡалалар кеүек үк, төрлө яҡлап үҙгәреүен дауам итә. Оҙайлы ялдарҙан файҙаланып, тормош иптәшем менән баш ҡала урамдарын гиҙеп йөрөп килдек. Ауылдан уҡырға килгән ике йәш кешене ҡауыштырып, оло тормош юлына оҙатҡан ҡалала хәҙер инде 50 йылдан ашыу торабыҙ - хәтерләйһе хәтирәләр, иҫләйһе ваҡиғалар бик күп.**

# БОРОНҒО МЕНӘН ЗАМАНСА...

## ҡулайлы ғына берләштерелә

Баш ҡаланың күпселек юғары уҡыу йорттары урынлашҡан тарихи үҙәктә һәр урам, һәр ағас, парк һәм йорт йәшлеккә алып ҡайтты. Ҡайнап торған студенттарҙы күреп, үҙебеҙҙең ғәмһеҙ йәшлеккә сәйәхәт ҡылдыҡ. Тарихи үҙәк йылдан-йыл үҙгәрә. Һәм шуныһы: үҙгәрештәр күп булһа ла, күҙ алдына барыбыр элекке Өфө баҫа, сөнки ҡала һәм республика хакимиәте боронғо менән замансаны ҡулай ғына итеп берләштереү әмәлен таба.



**(Дауамы 2-се биттә).**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕНСИЯЛА, ӘММӘ ЭШЛӘЙҘӘР



**Дәүләт Думаһы депутаттары пленар ултырышта беренсе уҡыуҙа эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялау тураһында закон проектын ҡабул итте. Был хаҡта парламенттың матбуғат хеҙмәте белдерҙе.**

2025 йылдан эшләгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияһын йыл һайын арттырыу планлаштырыла. Ҡануниәттәге үҙгәрештәрҙе ғәмәлгә ашырыу өсөн өҫтәмә бюджет ассигнованиелары талап ителә. 2025 йылда улар - 96,45 миллиард, 2026 йылда иһә 177,03 миллиард, 2027 йылда 260 миллиард һум тәшкил итер тип көтөлә.

Билдәле булыуынса, Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумының пленар сессияһында киләһе йылдың февраленән эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялау тәҡдимен индергәйне. 2025 йылдың 1 февраленән башлап йыл да хаҡлы ялдағыларға ғына түгел, эшләүен дауам иткән пенсионерҙарҙың пенсияһы ла арттырыла.

12+

БАШ ҠАЛАМ

# БОРОНҒО МЕНӘН ЗАМАНСА...

## ҡулайлы ғына берләштерелә

(Башы 1-се биттә).

Элек халыҡ кинотеатрға эркелеп йөрөнө. Яңы сыҡҡан һәм күптән яратылып өлгөрөлгән фильмдарҙы бары тик кинотеатрҙарҙа ҡараныҡ, шуға күрә "Родина", "Победа" һәм башҡа кинотеатрҙар көнөлгә бик яҡын. Әле Черниковка бистәһендә йөшәйбеҙ һәм ҡаршыбыҙҙа ғына "Победа" кинотеатры урынлашҡан. Гөрләп эшләп торған урындың күпмелер ваҡыт "йәнһеҙ" булыуы күңелдә ҡыра ине, әле бына ҡала башлығының уны реконструкциялауҙары тураһындағы иғланы бик шатландырҙы. Мәҙәни мираҫ объекты булған бинала ремонт эштәренән һуң балалар һәм йәштәр тауышы гөрләп торасаҡ, тип белдерҙе ул. Бик мәслихәт. Булғанын юҡ итмәйенсә, уны тәҙтәгү һәм яңынан сафҡа индереү ҙә күп көс талап итә, эштәре уң булһын, тип теләргә генә ҡала.

Өфөлә биш ҡатлы йорттар әлегә бихисап һәм уларға яңы тоҫ бирергә тырышыуҙарына ҡыуанам. Мәҫәлән, беҙҙең Черниковала, Невский урамының 3-сө һанлы йортонда ҡулына Өфөнөң гербында урын алған һыуһар тотҡан башҡорт ҡыҙының һүрәтен эшләнеләр. Ошо һәм башҡа ныҡдар Өфөбеҙҙә йәмләй. Уларҙың ерле халыҡтың йола-эпостарын, мәҙәниәтен һәм тарихын сағылдырғандары күберәк булһын ине, тиғән теләктә ҡалам.

Баш ҡаланың Үҙәк баҙары элек-электән ҡаланың йәнле, кеше күп йөрөгән, машиналар гөүләп торған урыны булды һәм булып ҡала. Һуңғы йылдарҙа был урын ҡала-ара таксиҙарҙың туҡталҡаһына әүерелеп китеп, күңелдә ҡыра ине, сөнки был бер ҙә ҡаланы йәмләмәне. Ә бөгөн килеп был урында матур сквер үҫеп сыҡты - ағастар һәм декоратив ҡыуаҡтар ултыртылған, эскәмйәләр ҡуйылған, тау таштары һалынған. Ғөмүмән, матур урынға әүерелгән.

Иноре бистәһе үҙәктән алыҫ булыуы менән айырылып тора. Унда барған үҙгәрештәр ҙә күпселек ҡала халҡына билдәһеҙ булып ҡала кеүек. Мәҫәлән, унда "Теплое" тип аталған күл бар. Быға тиклем ул бик насар, хатта ташландыҡ хәлдә булды. Ә оҙаҡламай был урын балалар һәм ололар өсөн дә ҡулайлаштырылған матур ял итеү урынына әүереләсәк. Ағымдағы йылдың 30 сентябренә тиклем төҙөкләндереү эштәре тамамланасаҡ, тип көтөлә. Шулай уҡ Иноре бистәһе халҡының теләген ишетеп, Николай Гастелло исемендәге стадионды ла төҙөкләндерерҙәр, тип ышанабыҙ.

Ҡаланы иҫке ағастарҙан ҡотолдороу әүҙем бара Өфөлә. Был, ҡайһы берәүҙәрҙең ҡаршы булыуҙарына ҡарамаҫтан, кәрәкле эш. Ел ваҡытында күпме ҡартайған ағастар ҡолай, тирәктәрҙең мамығынан бихисап кеше аллергиянан йонсой. Улар урынына баш ҡаланың бренды булған йүкә ағастарын ултыртыу отошло, тип уйлайым. Ни тиһәң дә, яңы нәмә яңы инде.

**Гөлйөҙөм ИШТУҒАНОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӘЙҘӘ, УЙНАРҒА!

**Өфөнөң Совет майҙанында 12-15 сентябрҙә "Әйҙә уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйындар фестивале үтәсәк. Икенсе тапҡыр ойошторолған сарала балалар өсөн тауарҙар етештереүселәр бөтә илдән килә, төрлө күргәҙмәләр, интерактив майҙансыҡтар, оҫталыҡ дәрестәре үтә, балалар яратып ҡараған йәнһүрәт геройҙары уйынсыҡтар иленә ишектәрҙе асасаҡ.**



"Былтыр балаларыбыҙға - тормошобоҙҙағы иң мөһим кешеләргә Совет майҙанын дүрт көнгә биргәйнек. Байрам килеп сыҡты тип уйлайым. Балаларға уйынсыҡтарҙың төрлөлөгөн күрһәтергә теләгәйнек. Әлбиттә, балаларыбыҙҙың яҡшылыҡҡа өйрәткән һәм тәрбиәләгән иң шәп уйынсыҡтары булһын өсөн барыһын да эшләйбеҙ. Оло ләззәт менән һеҙҙе икенсе "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй фестивalenә саҡырам", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Беренсе фестивалдә илдең төрлө төбәктәренән килгән 140-тан ашыу балалар өсөн тауарҙар етештереүселәр ҡатнашты. "Алтын айыу" балалар тауарҙары милли премияһы игротекаһына 30-ҙан ашыу алдынғы компания 500-гә яҡын уйын һәм уйынсыҡ тәҡдим итте. Уны 4 мең-дән ашыу өлкәндәр һәм балалар килеп ҡараны. Бала саҡ байрамында барлығы 250 өфөлө һәм ҡунаҡтар ҡатнашты. Беренсе фестивалдең ойоштороу кимәлен Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцов та юғары баһаланы һәм уның әһәмиәтен билдәләп, сараға федераль статус бирергә тәҡдим итте.

Быйыл фестивалдә ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы бай эшлекле программа көтә. "Заман бала сағының уйын мәҙәниәте" Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы иң төп сараларҙың береһе буласаҡ. "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй фестивале БР Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән уҙғарыла. Ул Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһы һәм Башҡортостан Хөкүмәте, РФ Федерация Советы, РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы ярҙамында ойошторола.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Рәсәйҙә уҡыусының мәктәптәге тәртибенә баһа ҡуйыуҙары мөмкин. Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет етәксеһе Валерий Фадеев шундай тәҡдим менән сығыш яһаны. Ул шулай уҡ тәртибе насар булған уҡыусыларҙы сығарылыш имтихандарына индермәҫкә саҡырҙы. Ә һеҙ был турала ниндәй фекерҙә?***

*Рәйсә КҮЗБӘКОВА, ветеран педагог:* Баланың тәртибенә баһа ҡуйып, һуңынан уны өлгөргәнлек аттестатына индереү идеяһын мин хупламайым. Күп йыллыҡ педагогик тәжрибәм күрһәтеүенсә, тәртипкә ҡуйылған баһа - бик ғәҙел, объектив булырға тейеш. Элек тә тәртип өсөн баһалар ҡуйылды, әлбиттә, тик улар күбеһе баланың уҡыу һәләтенә ҡарап билдәләнде: уҡыу алдынғыларының тәртибенә һәр саҡ "бишле", ә уртаса өлгәшкәндәргә йәки өлгәшә алмаған балаларҙың тәртибе "4", хатта "3" билдәләре менән баһаланды. Әле лә мәктәптәрҙә баланың тәртибе ошо ҡараштан сығып билдәләнә. Ә яҡшы уҡыу ғына уҡыусының өлгәшлә тәртип күрһәткесе булмауына бәйле фактар менән бөгөн даими осрашып торабыҙ.

Икенсенән, тәртипкә объектив баһа бирелмәгән көйө уға билдә ҡуйыу этик яҡтан дөрөҫ түгел.

Өсөнсөнән, тәртипкә баһа ҡуя башлау ата-әсәләр менән уҡытыусылар коллективы араһында төрлө конфликт ситуацияларын тыуҙырыуға этәргес булыуы мөмкин. Әлеге мәлдә предмет буйынса билдәләргә бәйле атай-әсәйҙәр һәм уҡытыусылар араһында аңлашылмаусанлыҡ йыш осрай. Күҙ алдына килтерегеҙ: баланың тәртибе "3" менән билдәләнгән атай-әсәйҙәрҙең реакцияһы ниндәй буласаҡ!

Дүртенсенән, баланың тәртибен объектив баһалау маҡсатында һыу буйы критерийҙар эшләнәсәк. Былай ҙа кәрәкмәгән отчет, яҙыу-һыҙыу менән ваҡытын үткәргән уҡытыусыға эш өҫтәләсәк. Балаға бүленергә тейешле иғтибар тағы ла ҡағыҙға бүленәсәк.

Тәртипкә баһа ҡуйып ҡына, тәрбиәле балалар үҫтереп булмай. Тәрбиә эшендә совет мәктәбендәге кеүек халыҡ педагогикаһына таянырға һәм ул ваҡыттағы рухи ҡиммәттәрҙе тергеҙергә кәрәк.

Әйтелгәндәрҙе күҙ уңында тотҡанда, өлгөргәнлек аттестатына баһа ҡуйыу - туранан-тура күҙ буяуға килтерә. Шуның өсөн, унан баш тартырға кәрәк тип, иҫәпләйем.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 июлдә Өфөлә Радий Хәбиров республиканың Үҙәк һайлау комиссияһына урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттары ҡултамғалары менән Башҡортостан Башлығы вазифаһына кандидатты хуплау ҡағыҙҙарын һәм кандидатты хуплау ҡағыҙҙарына ҡул ҡуйған кешеләр исемлеген тапшырҙы. Билдәле булыуынса, Башҡортостан Башлығын һайлау 2024 йылдың 6, 7, 8 сентябренә тәғәйенләнгән.

✓Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы стипендияһын алыусылар исемлеген ҡиңәйтте. Хәҙер республиканан дәртләндереү түләүҙәренә Рәсәй Фәндәр академияһының Металдарҙың үтә һығылмалылығы проблемалары институты аспиранттары ла иҫәп тоторға мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Башлығының айлыҡ стипендияһы аспиранттарға - 8050 һум, юғары уҡыу йорттары студенттарына - 6000 һум, урта махсус уҡыу йорттары студенттарына 5000 һум тәшкил итә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Брикс илдәренең спорт уйындары" Халыҡ-ара мультиспорт сараһы еңеүселәре һәм призёрҙары менән осрашты (БРИКС уйындары). Спортсылар менән осрашыу 12 - 23 июндә Ҡазанда үткән ярыш йомғаҡтарына, шулай уҡ республикала спортты артабан үҫтереү пландарына арналды. Башҡортостан спортсылары БРИКС уйындарында 20 миҙал яуланы - 12 алтын, ете көмөш һәм бер бронза.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ғаиләләрҙе "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 2024 йылдың 26 июнендәге документ менән Архангел районынан Рәйсә һәм Булат Йәнешевтар, шулай уҡ Благовещен районынан Ольга һәм Анатолий Фатеевтар балалар тәрбиәләүҙәге ҡаҙаныштары, ғаилә ҡиммәттәрен, традицияларын һаҡлауға һәм нығытыуға тос өлөш индергәне өсөн юғары наградаға лайыҡ булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән 100 мең һум премия тапшырыла.

✓Республиканың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов белдереүенсә, Башҡортостанда уҙған ял көндәрендә тау йылғаларында һыу кимәленең күтәрелеүе теркәлгән. Республика етәксеһе Радий Хәбиров һыу баҫыу ихтималлығы булған Әбйәлил, Салауат, Белорет райондары башлыҡтарынан иғтибарлы булыуҙарын һораны.

*✓ Бөгөн үҫмерҙәрҙең холҡо айырыуса агрессив төҫ алды, был күренештәрҙе хәҙер тәртипһеҙлек тип кенә атап булмай, күрәләтә енәйәтселек юлына баҫыусылар бар.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Рәсәйҙә уҡыусының мәктәптәге тәртибенә баһа ҡуйыуҙары мөмкин. Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет етәксеһе Валерий Фадеев шундай тәҡдим менән сығыш яһаны. Ул шулай уҡ тәртибе насар булған уҡыусыларҙы сығарылыш имтихандарына индермәҫкә саҡырҙы. Ә һеҙ был турала нindәй фекерҙә?***

***Наил ЮЛДАШБАЕВ, башҡорт теле уҡытыусыһы, Ейәнсура районы:*** Мин бөгөнгө көнгә тиклем уҡыусыларҙың тәртибенә баһа ҡуйыу тураһында уйланғаным юҡ ине. Сөнки мин дәрестәрҙә ундай проблемалар менән осрашҡаным булманы. Дөрөҫ, кластарҙа тәртип боҙорға ятраҡан уҡыусылар осрап тора, уларһыҙ булмайҙыр. Тик мин улар менән нисек булһа ла, бөтә тәжрибәмде туплап, уртаҡ тел табырға тырышам. Егеттәр менән - егеттәргә хас, ҡыҙҙар менән ҡыҙҙарға хас сифаттарын иҫәпкә алып. Башта шаярып, тәртип боҙоп маташалар ҙа, артабан аҡрынлап туҡтайҙар. Ғөмүмән, системалы рәүештә тәртип боҙоусылар миндә булғаны юҡ. Әгәр ундайҙар була икән, минә уҡытыусы исемен күтәреп йөрөү оят булыр ине. Шуға һеҙҙең ҡуйған һорауға ниндәйҙер төплө фекер йәки идея әйтә алмайымдыр.

Ә шулай ҙа был темаға фекер йөрөтөп ҡарайым әле. Әйе, СССР заманында, ул ваҡытта мин әҙерәк эшләп ҡалдым, уҡыусыларҙың тәртибенә "ҡәнәғәтләнерлек" йәки "ҡәнәғәтләнерлек түгел" тигән баһа ҡуя торғайнылар. Аңлауымса, шуны ҡабаттан тергеҙергә уйлайҙарҙыр. Ниндәйҙер кимәлдә, яны эшләй башлаған һәм дәрестә тәртип урынлаштыра алмаған уҡытыусылар өсөн был закон кәрәктер. Түгеләренә эшләп өйрәнеп, тәжрибә туплағансы ыңғай шарт тыуҙырыласаҡ. Ә икенселәренә килгәндә, ҡайһы бер уҡытыусылар дәресте шул тиклем яҡшы бирә, тик ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында, тәртип урынлаштыра алмай. Бына шундайҙарға ҙур ярҙам булыр ине. Шулай уҡ йәмғиәттә тәртипле һәм тәрбиәле кешеләр бермә-бер артыр, бәлки...

Икенсе яғы ла бар. Уҡытыусылар тәртип булдырыу өсөн баһа ҡуйыуҙы ҡорал итеп алһа, ҡайһы бер уҡыусылар ҙа мәктәпкә икенсе бер ҡорал - атыу ҡоралы менән килергә мөмкин. Сөнки "ҡәнәғәтләнерлек түгел" тигән баһа ҡуйылһа, уҡыусы имтиханға индерелмәйәсәк һәм документ алмаясаҡ, минең аңлауымса. Беренсенән, ундай уҡыусыларҙы артабан ниндәй яҙмыш көтә һуң? Улар киләсәктә имтихан бирә аламы? Тәртиптәре яҡшырһа, тип әйтһәк, уны беҙ нисек белә алабыҙ? Ҡабаттан мәктәптә уҡырға, әллә ҡайҙалыр эшләргә тейештәрме? Тәрбиәләп, ҡылыҡһырлама яҙып биреү өсөн уларҙы ниндәйҙер ойошма үҙ ҡанаты аҫтына алырға тейештер бит. Шулай уҡ тәртиптәре насар булғас, ундайҙарҙы кем эшкә алыр икән? Әгәр инде башҡа имтихан бирергә хоҡуҡтары булмаһа, улар нимә эшләргә тейештәр?

Икенсенән, араларында психикаһы "етлекмәгән" уҡыусы булһа? Бына улар мәктәпкә ҡорал менән килеүҙәре ихтимал. Улар менән нимә эшләргә? "Ҡәнәғәтләнерлек" билдәһен ҡуйһаң, башҡаларына нимә әйтәһең? Ҡуймаһаң, уларҙы кем ҡарауыллап торорға тейеш һәм ҡасанға тиклем? Һорауҙар бик күп... Бына ошо проблемаларҙың барыһын да ыңғай хәл иткәс кенә, ул законды ҡабул итергә булалыр.

***Гөлсиә МӨХӘМӘТОВА, йәш быуын вәкиле, менеджер:*** Был һорауға бер төрлө генә яуап биреүе ауыр, тип уйлайым. Әлбиттә, иң тәүге фекерем был тәҡдимде хуплау ине: "Шәп бит, һиһайәт, тәртип боҙоусы хулигандар кәрәктәрен аласаҡ!"- тигән уй килде башыма, сөнки шунда уҡ үҙемдең мәктәп йылдары күҙ алдына килеп баҫты. Синыфташ малайҙарҙың даими рәүештә тәртип боҙоуҙары, бәләкәстәрҙе йәберләүҙәре, дәрескә һуңлап килеүҙәре, тәнәфестә тәмәке борлатыуҙары, мәктәп милкен боҙоуҙары һәм башҡа бихисап холоҡһоҙлоҡтары иҫкә төштө. Ә бит уларҙың ғәфү иткеһеҙ был яман ҡылыҡтары күпселек осраҡта бер ниндәй язаһыҙ, һәүетемсә шыма ғына үтеп китә ине. Күрәһең, мәктәп етәкселеге лә быны күрмәмешкә һалышҡандыр, тейем, сөнки тәртипһеҙҙәр менән көрәшеүҙең файҙаһыҙ икәне һәр кемгә билдәле ине.

Бөгөн дә был йәһәттән хәлдәр яҡшырып киткәндер, тип уйламайым, киреһенсә, уҡыусы балаларҙың тәртибе хәүефле төҫ ала бара, был хаҡта бөтәбеҙ ҙә күреп, социаль селтәрҙәрҙән уҡып-белеп торабыҙ: буллинг күренештәре, беренсе ҡат тәҙрәһенән кеше фатирына шартлатҡыс шешә ташлауҙар, янғын сығарыуҙар... Мин йәшәгән йорттоң мәктәп эргәһендә булыуы ла күп нәмәгә күҙҙе аса, тетрәндерә. Бөгөн үҫмерҙәрҙең холҡо айырыуса агрессив төҫ алды, был күренештәрҙе хәҙер тәртипһеҙлек тип кенә атап булмай, күрәләтә енәйәтселек юлына баҫыусылар бар. Шуға күрә лә бындай уҡыусылар менән мәктәп коллективына ғына түгел, хоҡуҡ һаҡлау органдарына ла, йәмәғәтселеккә лә бергәләшеп, нимәлер эшләргә, саралар күрергә күптән ваҡыт, ә бәлки, һуңыраҡтыр ҙа әле. Әлбиттә, тәртипкә баһа ҡуйыу юлы менән генә яҡшы, юғары әхлаҡлы кеше тәрбиәләп булмай, ләкин тәрбиә эше һис алға бармай икән, ошондай тыйыу ысулы ла кемдәрҙелер аҡылға ултыртыр ине, бәлки....

Хәйер, тәртибе насар булған уҡыусы, ғөмүмән, юғары уҡыу йортона уҡырға инергә хыяллана микән, әллә киләсәген башҡасараҡ күҙаллаймы? Ундайҙар, ғәҙәттә, "үҙ кимәленән" әллә ни ары китә алмайҙыр барыбер, шуға күрә тәртибе арҡаһында вузға инә алмау улар өсөн "фажиғә" тип ҡабул ителер микән?

Был мәсьәләнең тағы бер яғы бар: уҡыусының тәртибенә кем баһа ҡуясаҡ һуң? Класс етәксеһеме? Был субъектив һәм бер яҡлы ғына баһа булмаҫмы? Ә мәктәптән тыш шарттарҙа кем баһалар тәртипте? Унан һуң тәртипте баһалау һөҙөмтәһендә уҡыусыны вузға инеүҙән мәхрүм итеү язаһы ниндәй хоҡуҡ нигеҙендә башҡарыласаҡ һуң? Ул закон статусына эйә буласаҡмы? Быныһы ла аныҡлауҙы талап итә, юғиһә шул хулигандың ата-әсәһе, кеше хоҡуҡтарын яҡлауға һылтанып, судлашып йөрөүе лә ихтимал бит.

Ҡыҫҡаһы, был тәҡдим әмәлһеҙҙән бер сара булырға оҡшай. Ул ныҡлап һәм бергәләп уйлашыуҙы, фекер алышыуҙы талап итә, шул саҡ, бәлки, берәй эш килеп тә сығыр, кем белә...

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҠУЛ БИРЕШМӘНЕЛӘР...

**Үткән аҙналағы (24-30 июнь) төп халыҡ-ара һәм сәйәси ваҡиғаларҙы бер-ике темаға бәйләнешле генә берләштереү мөмкин дә түгел, һәр ваҡиғаһы, улар төрлө һәм күп яҡлы йөкмәткеһе менән айырылып торҙо, шунлыҡтан был юлы "Донъя шаңдауы" ошо аралағы яңылыҡтарға ҡыҫҡаса күҙәтеү тәҡдим итергә булды.**

● Рәсәй армияһы Украина ҡораллы көстәренә ҡаршы камиллаштырылған һәм дошман эҙәрлекләүенә бирешмәй торған агродрондар ҡуллана башланы. Көньяҡ Донецк фронтында беҙҙең хәрбиҙәр модификацияланған пилотһыҙ осоу аппараттары менән файҙалана, дошман уты уны сәпкә ала алмай, ә агродрон үҙе теләһә ниндәй объектты юҡ итергә һәләтле. Оҫта ҡулдар агродрондарҙы ҡеүәтле хәрби ҡоралға әүерелдерҙе. Ул үҙендә туғыҙар килограмлыҡ ике мина йөрөтә һәм дошмандың нығытма нөктәләрен һәм башҡа объекттарын шартлатып, пехотаға алға барырға ярҙам итә.

● АҠШ-та үткән аҙнала 81 йәшлек Джо Байден менән 78 йәшлек Дональд Трамп араһында һайлау алды дебаттары булып үтте. Осрашыу алдынан демократ Байден менән республикасы Трамп бер-берһенә ҡул биреп күрешеүҙе лә кәрәк тапманы. Дебат башланып, 20 минут үтеүгә, ике арала дәғүәселәр бер-берһен кәмһетеүгә, ҡушаматтар тағыуға күсте. Байден Трампты "маңҡа малай", "лузер" тип атауҙан да тартынманы. Американың бындай хурлыҡты күргәне юҡ ине әле, тип яҙа урындағы матбуғат баҫмалары ғәмәлдәге президенттың сығышына һәм үҙен тотошона ҡарата. Дәртле, теремек дәғүәләше Трамп менән сағыштырғанда Байдендың ни дәрәжәлә меҫкен һәм көлкө хәлдә ҡалыуы уның фирҡәләштәренә лә хатта оҡшаманы һәм демократтар президенттың киләһе срокка кандидат булып ҡала алыуына икеләнеү белдерҙе. Ғәҙәттә, Байден сығыш яһағанда телесуфлер ярҙамына, йә булмаһа ҡағыҙға яҙылған шпаргалкаға ҡарап һөйләй, ләкин был юлы уға бер ниндәй ҙә суфлер ярҙам итә алманы, сөнки дебаттар күҙмә-күҙ тере һөйләшеүҙе, бәхәсләшеүҙе талап итә ине бит. CNN каналы хәбәр итеүенсә, "Президенттың ҡайһы бер һүҙҙәрен, ни әйтергә теләгәнен аңлауы ла ҡыйын ине. Айырыуса ул ниндәйҙер закон йә статистикаға һылтанырға теләгәндә буталып бөттә, тауышын бер көйгә һалып, ялҡытҡыс һөйләй. Күп урында ул Трампты йәтеш кенә "урынына ултыртыу" мөмкинлеген ҡулдан ысҡындыра..." Дебат һөҙөмтәһе буйынса Трамп 67 процент тауыш менән еңеүсе булды, ә Байден ни бары 33 процент тауыш йыйҙы.

● Францияла парламенттың түбәнге палатаһы - Милли йыйылышҡа һайлауҙарҙың тәүге туры булып үтте. Ике тур (киләһеһе -7 июлдә) һөҙөмтәһендә французлар 577 депутат һайлаясаҡ. 9 июндә Франция президенты Эммануэль Макрон үҙ фирҡәһе менән Европарламентта еңелеүгә дусар булғас (Марин Ле Пен етәкләгән "Милли берекмә" ультра уң партияһы 31 процент тауыш менән 14,6 процент тауыш йыйған Макрон партияһынан алға сыҡты), Франция президенты Милли йыйылышты таратып, үҙ кандидаттарын үткәреү өсөн янынан сираттан тыш һайлауҙар иғлан итте. Илдәге өс төп блок араһында көрәш ҡыҙа. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса "Милли берекмә" ил парламентына һайлауҙың тәүге турында 37 процент тауыш менән - беренсе, "Яңы халыҡ фронты" һул партия - икенсе (28 процент), ә Макрондың "Бергә" коалицияһы өсөнсө урында (20 процент) килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда "Ирәмәл" тәбиғәт паркы ваҡытлыса ябылды. Әйтеүҙәренсә, был ҡарар насар һауа торошона бәйле һәм ғәҙәттән тыш хәлдәргә юл ҡуймау өсөн ҡабул ителгән. "Ямғырҙан һуң йылғалар ныҡ ташты, контроль-үткәреү пунктҡарына инеү ҡыйынлашты. Автотранспорт юлдан йөрөй алмай, батып ултырыуы ихтимал", - тиелә белдереүҙә.

✓"Башнефть" йәнә бензинға хаҡты арттырған. Хәҙер компанияның яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-95 АТUM - 55,30 һум (+20 тин), АИ-92 - 50,40 һум (+30 тин), АИ-92 АТUM - 51,50 һум (+30 тин) тәшкил итә. Дизель яғыулығының бер литры иһә 66,90 һум (+13 тин). АИ-100 - 67,25 һум (+50 тин). Әйткәндәй, быйылғы йәйҙә "Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында хаҡ бишенсе тапҡыр ҡиммәтләнгән.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы "Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградалары һәм почетлы исемдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 2-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул итте. "Закон менән "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт хеҙмәткәре" тигән мактаулы исем булдырылды, - тип белдерҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Ул күп йыллыҡ намыҫлы эше һәм шәхси ҡаҙаныштары өсөн дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары хеҙмәткәрҙәренә бирелә".

✓Башҡортостанда "Һөт кухняһы" яңы продукция сығара башланы - хәҙер өлкәндәр өсөн. Был турала республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, өлкәндәр өсөн һөт ризыҡтарының төп эске сифат стандарттары - балалар өсөн кеүек. Уны фермерҙарҙан һатып алған һөттән әҙерләйҙәр. Продукцияның составы тулыһынса тәбиғи, унда яһалма өҫтәмәләр юҡ. Яңы продукцияны "Һөт кухняһы"ның таратыу пункттарында, шулай уҡ урындағы сауҙа селтәре магазиндарында һатып алырға мөмкин.

✓Башҡортостанда 20 махсус хәрби операция ветераны "Геройҙар дәүере" кадрҙар программаһы буйынса уҡый башланы. Әле "Ватанды һаҡлаусылар" фонды филиалы базаһында (Өфө ҡалаһы, Минһажев урамы, 107) ситтән тороп баһалау пункты асылған, унда проектта ҡатнашыусылар тест һәм әңгәмәләшеү үтергә мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Геройҙар дәүере" программаһына инеү өсөн махсус хәрби операцияла ҡатнашыу, юғары белемле Рәсәй гражданы булыу талап ителә.

✓ *Рәсәй Федерацияһы гражданлығын алған осраҡта йәшәгән урын буйынса хәрби иҫәпкә баҫырға кәрәклеген, шулай уҡ Оборона министрлығы менән килешеү төҙәгәндә гражданлыҡ алырға мөмкин икәнен аңлаттылар.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӘБӘРҺЕҘ ЮҒАЛҺА ЛА...

**Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығына махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн шифахана-курортта дауаланыу йәһәтенән ярҙам саралары исемлегенә төҙәтмәләр индерергә ҡушты.** "Патриот" паркында үткән осрашыуҙа "Ватанды һаҡлаусылар" фондының социаль координаторҙары был сараның махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар араһында ҙур һорау менән файҙаланыуы хаҡында һөйләне. Ләкин хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарҙың ата-әсәләре өсөн бындай мөмкинлек юҡ, сөнки ул махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының яҙма ғаризаһы буйынса ғына күрһәтелә. "Был норманы төҙәтергә һәм хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарҙың ата-әсәләренә шифахана-курортта дауаланыу мөмкинлеген бирергә кәрәк. Мәсьәлә юридик яҡтан хәл ителергә тейеш", - тине Башҡортостан Башлығы. Унаң һуҙҙәренсә, 3660 яугир һәм уларҙың ғаилә ағзалары шифахана-курорттарҙа һаулығын яҡшыртҡан.

✓ **Украина прокуратураһы ситтән тороп Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировты һәм Өфө мэры Ратмир Мәүлиевты ғәйепләне.** Украина яғы фекеренсә, улар Рәсәй ғәскәрҙәренең ихтыяжын матди яҡтан тәьмин итергә ярҙамлаша, мәҫәлән, Махсус хәрби операция биләмәһенә гуманитар ылауҙар оҙата, шулай уҡ Украина сиктәрен үҙгәртеү өсөн алып барылған эштәрҙе финанслай. Судҡа тиклемге тикшереү менән Винница өлкәһендәге Украина хәүефһеҙлек хеҙмәте идаралығы шөғөлләнә. Башҡортостан Башлығының матбуғат секретары Диана Сәфәрғәлиева был яңылыҡҡа рәсми яуап бирҙе. Ул Украина яғының ошондай реакцияһын Радий Хәбировтың махсус хәрби операцияға ярҙам итеүгә индергән шәхси өлөшөн таныу тип атаны. Радий Хәбиров Украинаның прокуратура органдары ғәмәлдәренә тыныс ҡарай һәм Махсус хәрби операцияның маҡсатына өлгәшеү өсөн барыһын да эшләй, тип билдәләне матбуғат секретары.

✓ **Башҡортостанда элекке мигранттарҙы хәрби иҫәпкә ҡуйыу дауам итә.** 28 июндә Рәсәй Тәфтиш комитетының Өфө гарнизоны буйынса хәрби тәфтиш бүлеге тәфтишселәре баш ҡалабыҙҙың Рәсәй гражданлығын алған сит ил граждандары эшләп йөрөгән урындарында иҫкәртеү саралары үткәрҙе. Рейд барышында 25 сит ил граждане тикшерелде, өсәүһенең шәхесе асыҡлана. "Бынан алда Рәсәй гражданлығын алған ундан ашыу кеше хәрби иҫәпкә ҡуйыу өсөн хәрби комиссариатҡа оҙатылды. Башҡаларға иһә Рәсәй Федерацияһы гражданлығын алған осраҡта йәшәгән урын буйынса хәрби иҫәпкә баҫырға кәрәклеген, шулай уҡ Оборона министрлығы менән килешеү төҙәгәндә гражданлыҡ алырға мөмкин икәнен аңлаттылар", - тип хәбәр иттеләр ведомстволың матбуғат хеҙмәтендә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШ СӘФӘРЕНДӘ...




**Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Белоруссияла эш сәфәре менән булды. Республикабыҙ вәкилдәре Витебскиҙа Беларусь һәм Рәсәй төбәктәренең XI форумында ҡатнашты, шулай уҡ дуҫ дәүләттең өлкәләре һәм ҡалалары менән хеҙмәттәшлек тураһында яңы килешеүҙәр төҙөнө.**

Журналистар менән аралашҡанда Башҡортостан Башлығы республика делегацияһының Белоруссияға сәфәренең төп бурыстарын билдәләне. "Быйыл Витебскиҙа Беларусь һәм Рәсәй төбәктәренең форумы үткәрелә. Беҙ унда ике республика төбәктәре араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәрҙе актуалләштерергә планлаштырабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Ошо көндәрҙә Витебскиҙы немец-фашист илбаҫарҙарынан азат итеүҙең 80 йыллығын билдәләйҙәр. Ҡала өсөн был - төп байрамдарҙың береһе. Урындағы халыҡ үҙ тарихына ихтирам менән ҡарай, шул йылдарҙағы хәл-ваҡиғалар хаҡында хәтерҙе һаҡлай һәм уны йәш быуынға тапшыра". Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Витебскиҙа Беларусь һәм Рәсәй төбәктәре форумында сығыш яһағанда республиканы төп эшлекле партнерыбыҙ тип атаны. "Улар - беҙҙең дуҫтарыбыҙ һәм фекерҙәштәребеҙ. Беҙҙе һәр саҡ Белоруссиялағы коллегаларҙың эшлеклелеге, халыҡтарыбыҙҙың мәҙәни һәм рухи яҡынлығы хайран ҡалдыра, был иһә беҙгә тиҙ генә килешеп, уртаҡ проекттарҙы бойомға ашырырға мөмкинлек бирә. Беларусь төбәктәре, ошо илдең ҙур предприятиелары менән хеҙмәттәшлек, сәнәғәт кооперацияһы һөҙөмтәһендә беҙ импортты алмаштырыу мәсьәләләрен, илдең технологик суверенитетына өлгәшеүҙе уңышлы хәл итәбеҙ. Республикабыҙҙа быға тиклем булмаған яңы компетенциялар барлыҡҡа килә", - тине республика етәксеһе.

гуманитар ылауҙар ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡандары өсөн рәхмәт белдерәм. Республика Донбасҫҡа барлығы 130-ҙан ашыу колонна оҙатты. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың, шул иҫәптән һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләре тураһында хәстәрлек күреү - шулай уҡ мөһим бурыс. Муниципалитеттар, ауыл биләмәләре етәкселәре лә хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә ярҙам итеүҙә шәхсән ҡатнашырға тейеш. Эштең өсөнсө йүнәлеше - төбәктең иҡтисадин һәм социаль өлкәһен тотороҡло үҫтереүҙе тәьмин итеү".

Радий Фәрит улы көн тәртибендәге тағы бер көнүҙәк мәсьәлә - халыҡтан телефон аша аҡса талап иткән мутлашыусыларға ҡаршы тороу тураһында ла иҫкәртте. "Үҙған аҙнала республика халҡы мутлашыусыларға 27 миллион һум аҡса ебәргән. Был аҡсалар шул иҫәптән Украина хәрбиҙәренә лә китә, - тип хәбәр итте Радий Хәбиров. - Бөгөнгө семинар программаһында ошондай мутлашыуҙарҙан һаҡланырға өйрәтеү ҙә ҡаралған. Әммә ябай ҡағиҙәне онотмаҫҡа кәрәк - бер кемгә лә ышанмаҫҡа. Әгәр билдәһеҙ номерҙарҙан шылтыраталар икән, мин яуап бирмәйем. Кемгә минең менән аралашыу ысынлап та мөһим, ул яйын табасаҡ. Ошондай мәсьәләләрҙе халыҡ менән осрашыуҙарҙа мотлаҡ тикшереүегеҙҙе һорайым", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

# ХАЛЫҠТЫ НИ БОРСОЙ?

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районында республиканың Әлшәй, Аҫҡын, Благовещен, Борай, Бөрйән, Ғафури, Йылайыр, Көйөргәҙе, Мәсетле, Стәрлебаш, Туймазы, Саҡмағош һәм Яңауыл райондары ауыл биләмәләре етәкселәре семинарында ҡатнашты. Ул Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында үтте.**

Төбәк етәксеһенең ауыл биләмәләре башлыҡтары менән осрашыуында халыҡты борсоған мәсьәләләр күтәрелде. Көнүҙәк һорауҙар иҫәбендә - автомобиль юлдарын яңыртыу, инженер селтәрҙәрен төҙөү һәм ремонтлау, тораҡ пункттарҙы төҙөкләндереү, шулай уҡ социаль проекттарҙы һәм программаларҙы тормошҡа ашырыу. Үҙ сығышында төбәк етәксеһе республиканың идара итеү командаһының төп бурыстарын билдәләне. "Һис шикһеҙ, берлектәге эшебеҙҙең мөһим йүнәлеше - Махсус хәрби операцияға ярҙам итеү. Бөтә муниципалитеттарға, ауыл биләмәләренә Ватан һағындағы яугирҙарыбыҙ өсөн

# ИҠТИСАДИ ИМЕНЛЕК СЫҒАНАҒЫ

**Республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко хәбәр итеүенсә, 2023 - 2024 йылдарҙа Башҡортостанда туризм инфраструктураһын үҫтереүгә 3,9 миллиард һум йүнәлтелгән. Был рекордлы сумманың 1,6 миллиарды - дәүләт ярҙамы, ә 2,3 миллиарды - инвесторҙар аҡсаһы.**

Республикала кемпингтар һәм глэмпингтар булдырыуға 2,4 миллиард һум йүнәлтелгән, шуларҙың 1 миллиарды - дәүләт ярҙамы һәм 1,4 миллиарды - инвесторҙар аҡсаһы. 32 муниципалитетта 750-нән ашыу ял бүлмәһе булдырыу буйынса барлығы 78 инвестиция проекты хуплау тапҡан. Иң күп проекттар Белорет, Әбйәлил һәм Ҡариҙел райондарында тормошҡа ашырыла. Зөһрә Гордиенко билдәләүенсә, грант алыусыларҙың 45 проценты туристик тармаҡта бай тәжрибә туплаған һәм эшләп килгән объекттарға эйә. Алынған субсидияларҙы улар булған базаны киңәйтеүгә һәм йыл әйләнәһенә файҙаланыласаҡ модулдәр төҙөүгә йүнәлтә. 2024 йылда Башҡортостан туризмдың өҫтөнлөклө йүнәлештәрен үҫтереүгә 166,2 миллион һум күләмендә берҙәм федераль субсидия алыуға ирешкән. Йәлеп ителгән средстволар күләме буйынса республика - Волга буйы федераль округында өсөнсө урында. Гранттарға туризм инфраструктураһын үҫтереү, шулай уҡ ҡала үҙәгенең туристик кодын төҙөкләндереү һәм ваҡиғалы саралар үткәреү буйынса 72 проект тәҡдим ителгән. Грант еңеүселәр 20 июлдән һуң билдәле буласаҡ. Бынан тыш, 2024 йылда Рәсәй Иҡтисади үҫеш министрлығы 2025 - 2027 йылдарҙа модулле капиталь булмаған төҙөлөштәрҙе субсидиялауға тағы ла бер конкурс үткәрергә планлаштыра. Ошоға бәйле Зөһрә Гордиенко муниципалитет башлыҡтарына туризм инфраструктураһын булдырыу өсөн яраҡлы ер участкалары менән тәьмин ителгән потенциаль инвестиция проекттары туплапмаһын әҙерләүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Башҡортостан Башлығы ғариза тапшырыу кампанияһын уңышлы үтеүҙең мөһимлеген билдәләне. "Был өлкәлә беҙҙә күп эштәр башҡарыла. Муниципалитет башлыҡтарына, туризмда - иҡтисади именлек сығанағы, тип һәр ваҡыт әйтә киләм", - тине Радий Хәбиров.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓30 июндә Өфөлә Ағиҙел йылғаһы буйында ойошторолған Рәсәй йәштәре көнөнә 17 мендән ашыу кеше килде. "Мин шунсама йәштәрҙе күптән күргәнем юҡ ине. Барыһының да йөҙөндә - бәхетле йылмайыу. Йәштәрҙән көсдәрт алып, ҡәнәғәт күнел менән ҡайтып киттем", - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Республика Башлығы үҙенең хакимиәте етәксеһе Максим Забелинға ҡала-райондарҙа йәштәр өсөн сараларға анализ яһарға ҡушты һәм бындай байрамдарҙы күберәк үткәрергә кәрәклеген билдәләне.

✓Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Иң яҡшы йыл табибы" Бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһаны. "Иң яҡшы акушер-гинеколог" номинацияһында беренсе урынды Республика перинаталь үҙәге табибы Динар Ғабдрахманов яуланы. "Иң яҡшы табип-эксперт" номинацияһында Өфөнөң 21-се ҡала дауаханаһының патологоанатомия бүлеге мөдире Сергей Щекин еңде. Республика клиник дауаханаһының оториноларингология бүлеге мөдире Артур Мөғәллимов, Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының кардиология бүлеге мөдире Марина Плотникова һәм профессор, Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының табип-травматолог-ортопеды Рәсүл Яҡупов өс призер иҫәбенә инде.

✓Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Уралинтех" предприятиеһының эшмәкәрлеге менән танышты. Ул 1998 йылда булдырылған. Предприятиела йылына дөйөм ҡеүәте 2500 тонна тәшкил иткән онтаҡ һымаҡ бояу етештереү буйынса 8 юғары технологиялы линия ҡуйылған. Онтаҡлы бояуҙар импортты алмаштырыусы продукция булып тора. Әйткәндәй, предприятиела етештерелгән бояу менән буятылған деталдәрҙең береһе йыһанда ла булған, завод эшселәре был хаҡта ғорурланып һөйләй.

✓Көслө ямғырҙар Ағиҙел һәм Өфө йылғаларының күтәрелеүенә сәбәпсе булды. Шуға баш ҡаланың рәсми пляждарында ла һыу инеү тыйыла. "Һыу ташҡанда ағым көслө, һыу аҫтында төрлө сүп-сар булырға мөмкин, һыуҙың сифаты насарая - быларҙың барыһы ла хәүеф менән янай",- тип белдерҙеләр граждандарҙы яҡлау идаралығының матбуғат хеҙмәтендә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**"Белемлелек - арыҫландан көслө батыр", тигән шиғыр юлдары һәр кемебеҙҙең хәтерендә, был хаҡ һүҙҙәр менән килешмәгәндәр юҡтыр. Быны илебеҙ һәм донъя кимәлендә лә яҡшы аңлайҙар, шуға ла бөгөн фән һәм мәғариф өлкәһенә һәр тарафтан иғтибар юғары. Өфөлә төҙөләсәк Евразия ғилми-белем биреү үҙәге ошо маҡсаттарҙы бойомға ашырыуҙа мөһим роль уйнай.**

# НИҘӘР БАР ҺУҢ...

## студенттар кампусында?




Йәштәр көнөндә республика журналистары Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең Вуз-ара студенттар кампусын барып күрҙе һәм уның эшмәкәрлеге менән таныша алды. 2000 йылдар башында уҡ төҙөлә башлаған, әммә оҙаҡ йылдар ташландыҡ хәлендә торған бинаны ярты йыл эсендә бөтә унайлыҡтары булған, заманса йыһазландырылған фән һәм мәғариф үҙәгенә әүерелдергәндәр. Бында республиканың юғары уҡыу йорттарына бүленгән IQ-паркта 21 фәнни лаборатория эшләй. Улар араһында Өфө фән һәм технологиялар университетының органик наноэлектроникалар һәм яңы материалдар дизайны лабораторияһы, "Киләсәк моторҙары" алдынғы мәктәбенең лабораторияһы ла бар. Һуңғыһы юғары һөҙөмтәле һәм гибрид көс ҡулайламаларын, агрегаттар һәм уларҙың һуғыш, Рәсәй граждандар авиацияһы өсөн системаларын эшләү буйынса ғилми-технологик мәсьәләне хәл итеү буйынса маҡсаттарҙы үтәй. Алдынғы инженер мәктәбенең проекттарына быйылғы йылда ғына ла федераль ҡаҙнанан 1,2 млрд һум йәлеп ителгән. Шулай уҡ ӨФТУ-ның популяция һәм медицина генетикаһы буйынса лабораторияһы "Өҫтөнлөк 2030" стратегик үҫеш программаһының "Сәләмәт оҙон ғүмерлелек" проекты сиктәрендә үткәргән тикшеренеүҙәре лә бик әһәмиәтле. Был өлкәлә йәш ғалимдар яман шеш ауырыуҙарына бирешеүсән гендарҙы өйрәнә, ауырыуҙы алдан табыу һәм иҫкәртеү ысулдарын эҙләй. Университеттың шулай уҡ заман йәштәренә ҡыҙыҡлы йүнәлештә лә эше унышлы бара - Вуз-ара кампуста "Спаркс" киберспорт үҙәгендә Йәштәр сәйәсәте буйынса идаралыҡтың Цифралы спортты үҫтереү үҙәге менән Спорт программалаштырыуы биләмәһе урынлашасаҡ. Әле ҡатын-ҡыҙ киберспортсылар командаһы төҙөлгән, ә ӨФТУ-ның йыйылма командаһы Рәсәйҙең иң көслө киберкомандалары иҫәбенә ингән.

Журналистар Башҡорт дәүләт медицина университетына ҡараған фәнни бүлектәрҙең эшмәкәрлеген айырыуса оло ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итте. Мәҫәлән, ишетеп белеүегеҙсә, күптән түгел республиканың кардиоүҙәгендә ауырыуҙың аорта имплантын ҡулланып, үҙенсәлекле операция ярҙамында кешенең ғүмерен һаҡлап ҡала алғайны табиптарыбыҙ. Бына шул аорта имплантын БДМУ-ның аддитив технологиялар лабораторияһы хеҙмәткәрҙәре эшләгән. Лаборатория хеҙмәткәре Фәнир Килмөхәмәтов әйтеүенсә, бында 3D-принтерҙәр ярҙамында кешенең һөйәктәре, төрлө ағзалары күсермәнен яһайҙар: был медицина өлкәһендә белгестәр әҙерләүҙә лә, кеше һаулығы өсөн дә кәрәкле мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә. Мәҫәлән, кешенең тубыҡ һөйәген дауалағанда ҡулланыла торған махсус ваҡытлыса имплантттарҙы 3D-баҫма менән эшләй башлағандар һәм был ауырыуҙарға ваҡытында мотлаҡ медицина страховкалауы буйынса тейешле дауа алырға мөмкинлек бирә. Элек сит илдән һатып алынған махсус кәрәк-яраҡ үҙебеҙҙеке менән алмаштырыла, был иһә, имплантттарҙың хаҡына ла йоғонто яһай - дауаланыу күпкә осһоҙораҡҡа төшә.

Башҡорт дәүләт медицина университетының "Фарма-үҙәк" хеҙмәткәрҙәре яңы дарыуҙар уйлап табыу буйынса тикшеренеүҙәр үткәрә. Улар психотроп, йөрәк-ҡан тамырҙары, нейро-проекторлы әүҙемлеккә эйә яңы матдәләр синтезлау йүнәлешендә эшләй. Билдәле ғалим, профессор Феркат Хәлиуллин был лаборатория тураһында һөйләп, тәү сиратта йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, депрессия, баш мейеһендә ҡан әйләнеше боҙолоу һәм башҡа осраҡтарҙа ҡулланыласаҡ үҙенсәлекле яңы төр дауалау сараларын уйлап табыу, етештереүгә әҙерлек буйынса эшләүҙәрен әйтте. Әйткәндәй, бинаның Башҡорт дәүләт медицина университетына ҡараған бер өлөшөндә таҙа бүлмәләр комплексы ла буласаҡ, унда хеҙмәткәрҙәр айырым ишектән инеп, тулыһынса кейем-һалымын алмаштырып, махсус ҡорамалдар ярҙамында таҙарынып ҡына үтә аласаҡ.

Вуз-ара студенттар кампусының Өфө дәүләт нефть техник университетына бүленгән өлөшөндә лә бик ҡыҙыҡлы проекттар бойомға ашырыла. Юғары уҡыу йортонон "Кибер-ателье"-һында виртуаль технологиялар ярҙамында ла "аҡыллы" кейемдәр эшләп сығаралар. "Был спорт кейеме, нефть-газ өлкәһе хеҙмәткәрҙәре өсөн махсус кейем булырға мөмкин. Ғөмүмән, кеше һаулығы өсөн ҡурҡыныс тыуҙырған өлкәләрҙә эшләгән хеҙмәткәрҙәр өсөн кейемдәр проектлайбыҙ һәм тегәбеҙ. Һәр кемгә яраҡлы кейем тегеү өсөн кешенең кәүҙәһен тотошлай сканер аша үткәрәбеҙ. Был беҙҙең киләсәк - цифралы фабрика. Алдыбыҙҙа Башҡортостан халҡын скандан үткәреү һәм үлсәм типологияһын билдәләү бурысы ла тора. Кейем фабрикалары быны түҙемһеҙләнеп көтә. Сөнки бөгөн ҡатын-ҡыҙҙарҙың да, ир-егеттәрҙең дә һындары үҙгәреүен, элек эшләнгән үлсәмдәр ярамауын күҙәтәбеҙ. Һәм сит илдәрҙә бындай эштәр алып барылғанда беҙҙә торғонлоҡ булды. Әле еңел сәнәғәт өлкәһендә үҫеш күҙәтелә, юғары белем алырға теләгән йәштәрҙе үҙебеҙҙә көтәбеҙ", - тине ӨДНТУ-ның кейем конструкциялау кафедраһы доценты Зарема Григорьева. Ғалимә шулай уҡ эшсәндәр өсөн махсус ҡышҡы кейем уйлап табыуҙары, уны кешенең тән температураһын, ҡан баҫымын, һауа температураһын, газ кимәлен һәм башҡа мөһим күрһәткестәрҙе үлсәгес датчиктар менән тәьмин итеүҙәре тураһында һөйләне. "Кибер-ателье"ла йәш белгестәр үҙҙәре кейемһалым уйлап таба, тегә ала. Һөнәр үҙләштерергә теләүселәргә вузда 25 бюджет урын тәҡдим ителә, һынауҙарҙы ла үтеүе ауыр түгел, ти Зарема Ринат ҡыҙы.

Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең Вуз-ара кампусының төҙөлөшө дауам итә: 4300 урынлыҡ күп ҡатлы студенттар ятағы, 4 ҡатлы геном үҙәге, уҡыу блоктары, йәмәғәт-эшлекле майҙансыҡтар, лабораториялар буласаҡ. Әйткәндәй, геном үҙәген быйылғы йылдың аҙағына ҡулланылышҡа индереү көтөлә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**- Вуз-ара студенттар кампусы - киләһе 20-30 йылды алдан күҙалларға һәм фән, мәғариф, йәмәғәт тормошо ниндәй булырын билдәләргә тырышыу ул. Бөгөн фән бик ҡатмарлы, күп кенә алдынғы технологиялар бер нисә дисциплина киҫелешендә барлыҡҡа килә. Шуға бер кафедра, бер факультет, хатта университет кимәлендә лә ҡатмарлы техник мәсьәләне хәл итеүе мөмкин түгел. Ә беҙҙең кампуста төрлө өлкәләрҙә ғилми асыштар яһаған тикшеренеүселәр бер урынға туплана һәм аралаша алһын өсөн барлыҡ унайлы шарттар булдырыласаҡ. Шулай уҡ республикабыҙҙы, Өфөнө фән һәм белем биреүгә төп иғтибар йүнәлтелгән урын булараҡ халыҡ-ара кимәлдә танытыу маҡсаты ла бар, - тине беҙҙең менән аралашыуға йомғаҡ яһап, Вуз-ара студенттар кампусы директоры Сергей Гладких.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*УӘТ, ШУЛАЙ!*

# "ҠУРАЙЛЫ МАЛАЙ" ЯНЫНДА...



**Йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек эштәренең төп йүнәлештәренең береһе булып тора.**

Юбилей объекттары иҫәбенә "Ҡурайлы малай" скульптураһы булған фонтан һәм уның янындағы майҙан, шулай уҡ Сәйетғәлиев бульвары инә. Өфөләр ошо скульптура композицияһының Октябрь проспектында элекке "Искра" кинотеатры алдындағы майҙанда урынлашҡанын яҡшы белә. Ул 1974 йылда Мәскәү скульпторы Маргарита Соловьева-Ефимова проекты буйынса ҡуйылған.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо территорияны төҙөкләндереү буйынса эштәр барышы менән танышты. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев бындағы йәмәғәт биләмәһендә төрлө йәштәге кешеләр өсөн тейешле шарттар буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Реставрацияланған фонтан янында ҡала кешеләре балалары менән бергә ял итә аласаҡ. Кинотеатр бинаһынан һулдараҡ, ҡарағайҙар араһында, күләгәлә ял итеп алыу мөмкинлеге буласаҡ. Сәйетғәлиев бульварының көньяғында йәйәү йөрөү зонаһы булһа, уның төньяғынан ике яҡлы автомобиль юлы үтәсәк. Яңыртылған территорияла ҙур йүкә ағастары ултыртылды, бында уларҙы һуғарыу өсөн автоматик һыу һибеү ҡоролмаһы ҡуйыласаҡ. "Искра" кинотеатры артында, Комсомол урамы яғынан, төҙөкләндерелгән сквер булдырыу күҙаллана. Проектҡа ярашлы, бында бер нисә махсус зона хасил буласаҡ: интерактив музыкаль мөйөш, ял итеү урындары, шулай уҡ спорт һәм уйын майҙансыҡтары бында килгән кешеләргә хеҙмәт итәсәк. Ял итеүселәргә унайлы булһын өсөн пандустар, эскәмйәләр, урналар һәм мәғлүмәт стендтары ҡуйыласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡайын еләге

❖ Һыткы, сабыртма сыҡҡанда термоска 50 грамм ҡайын еләген һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөләккә ҡалдырырға. Төнәтмәне көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Ангинанан 50 грамм киптерелгән ҡайын еләге һәм ҡурай еләге япраҡтарына 1 литр һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға. Ә иртәнсәк ауыҙы ябыҡ һауытта ҡайнатып, талғын утта тағы 15 минут тоторға, йылыға төрөп 5-6 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Йылы төнәтмә менән тамаҡты сайҡарға.

❖ Тимерәү (экзема) булғанда ҡайын еләген иҙеп, бинтҡа төрөп, сирле урынға һалырға. Боҫламаларҙы 3-4 көн дауамында яһарға.

❖ Гастрит, колит ауырыуҙарынан 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 2 стакан ҡайнатылған һыуыҡ һыу ҡойорға, 6-8 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Глистарҙан ас ҡарынға 3 кг ҡайын еләген селедка һәм һуғанға ҡушып ашарға. Был рәүешле солитер, йомро глистар һәм бабаҫырҙан (острица) ҡотолорға була.

## Ҡара көртмәле

❖ Ангинанан 100 грамм кипкән ҡара көртмәлегә ярты литр һыу ҡойоп, күләме 0,3 литрға тиклем кәмегәнсе ҡайнатырға. Тамаҡты сайҡатырға.

❖ Геморройҙан 40 грамм кипкән ҡара көртмәлегә 1 стакан һыу ҡойоп, 20 минут ҡайнатырға һәм клизмалар яһарға.

❖ Гингивит, стоматит булғанда яңы һығылған ҡара көртмәле һуты менән ауыҙҙы сайҡатырға. 2 ҡалаҡ кипкән емешкә 1 стакан һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтеп, көнөнә 3-4 тапҡыр ауыҙҙы сайҡатыу ҙа ярҙам итә.

❖ Сырышҡан тирегә бер тигеҙ өлөштә ҡара көртмәле емеше, ҡаймаҡ һәм талҡан ҡушып, яҡшылап иҙергә һәм биткә һыларға. 10 минуттан йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

❖ Теш һыҙлағанда 100 грамм ҡара көртмәле сәскәһенә 0,5 литр һыу ҡойоп, шыйыҡсаның өстән бер өлөшө бөткәнсе ҡайнатырға һәм бүлмә температураһында һыуытып, һөҙөргә, ауыҙҙы сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Әгәр элек осраҡлы рәүештә шылтыратһалар, хәҙер енәйәт ҡылыуға әҙерлек бара. Киберразведка ысулдарын ҡулланып, мутлашыусылар буласаҡ ҡорбанды урланған мәғлүмәттәр базаһы йәки сайттар ярҙамында өйрәнә.*



## ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ыласын**

**(Сапсан)**



Ҙурлығы буйынса ыласындар төркөмөндә шоңҡарҙан ғына ҡалыша. Кәүҙә оҙонлоғо 44-50 см-ға етә. Арҡаһы ҡара төҫтә тиерлек, буй һыҙаттары булыуы ла ихтимал. Ҡорһағы аҡ, алһыу йәки ҡыҙғылт. Ҡорһағында ваҡ ҡына буй һыҙаттары бар, түше ваҡ ҡына ҡара таптар менән "биҙәлгән". Башы ҡара. Инә ҡоштоң төҫө ҡараҡаҡ була. Йәш ҡоштарҙың бәпкә йөнө аҡ, бер йәшлек ҡош иһә ҡара төҫкә инә һәм оло ҡоштарға ҡарағанда ла ҡараҡ кеүек тойола. Тауышы көслө, "кьяк, кьяк, кееек-кееек" тип ишетелә. Осҡан саҡта ҡанаттары менән елпемәй, осоп барған ҡорбанына һауала уҡ ташлана.

Ыласын әлеге мәлдә тиҙ юҡҡа сығып барыусы ҡоштар иҫәбендә. Шуға ла бөтөн кимәлдәге Ҡыҙыл китаптарға индерелгән.

Ныҡ таралған төр, бөтөн континенттарҙа һәм архипелагтарҙа, шул иҫәптән Рәсәйҙә осрай. Башҡортостанда һирәк оя ҡора, уны осоп үтеп барышлай ғына күрергә була тиерлек. Шулай ҙа республиканы төйәк итеүсе ыласындар бар.

Таулы урмандарҙа, йылғаларҙың ҡаялы ярҙарында оя ҡора. Көндөҙгө ҡош, шулай ҙа ҡышлаған осорҙарында ыласындың айлы төндәрҙә һунар итеүен күрергә тура килде. Ҡорбанын осоп барышлай тота, уға сәғәтенә 100 м/секунд тиҙлегендә ташлана. Кешенән ҡурҡмай, хатта ҡалала ла оя ҡороуы ихтимал. Өфөлә банк ҡыйығында оя ҡороп, бала сығарған ҡоштар тураһындаа барығыҙҙың да ишеткәне барҙыр, моғайын.

Төп ризығы - уртаса ҙурлыҡтағы ҡоштар, өйрәктәр, ҡорҙар, аҡсарлаҡтар, ҡалала иһә - күгәрсендәр. Торна, ҡаҙ, селән кеүек эрерәк ҡоштарға ла һунар итә. Бәпкәләре бәләкәй саҡта уларҙы турғай кеүек ҡоштар менән һыйлай, шуныһы ҡыҙыҡ, башта уларҙың йөнөн йолҡа, башын һәм аяҡтарын өҙөп ташлай.

1-2 йәшлек ҡоштар парын һайлап, оя ҡора башлай. 2-4 йомортҡа һала, ата ҡош та инә ҡош менән бер рәттән, йомортҡа баҫа. 2-3 бәпкәһе була, ата менән инә ҡош уларҙы дошмандарҙан ныҡ һаҡлай.

Ыласындың йылдан-йыл кәмеүенең сәбәбе булып браконьерлыҡ, пестицидтар тәьсире, ыйыртҡыс йәнлектәрҙең уларҙың ояһын туҙҙырыуы тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

## АЛДАНМАҒЫҘ!

# МИЛЛИОНЛАП БИРӘЛӘР...

**Көн һайын Башҡортостан халҡы төрлө иҡтисади "тоҙаҡҡа" эләгә, оҫта манипуляторҙар намыҫлы граждандарҙың аҡсаһын һура. БР буйынса Эске эштәр министрлығы мәғлүмәт-коммуникация технологияларын законһыҙ ҡулланыуға ҡаршы көрәш бүлеге начальнигы полиция полковнигы Азат Тимерйәнов "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисы Ксения Калинина менән әңгәмәлә мутлашыусыларҙың ниндәй хәйләләргә барыуы, кемдең уларҙың ҡорбаны булыуы һәм ни өсөн әле лә был хәлдең дауам итеүе хаҡында һөйләне.**



**➔ Азат Флүс улы, былтыр һәм быйылғы йыл башындағы статистиканан башлайыҡ. Республикала йәшәүселәр мутлашыусыларға күпме аҡсаһын бирә?**

- Былтыр беҙҙең төбәк граждандары мутлашыусыларға 3 миллиард 200 миллион һумдан ашыу аҡса күсергән. Быйыл дүрт ай йомғаҡтары буйынса - 1 миллиард 200 миллион һум. Бөгөн 1 миллиард 700 миллион һум самаһы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, алданыуҙар дауам итә. Енәйәт һаны тураһында һүҙ барғанда, 2023 йылда 10 меңгә яҡын мутлашыу, 2024 йылда банк карталарынан аҡса урлауҙы иҫәпкә алып, 4 мең енәйәт ҡылынған. Көнөнә уртаса зыян 10-15 миллион һум тәшкил итә. Эш көндәрендә граждандар 20 миллионға тиклем күсерә ала, ял көндәрендә сумма аҙыраҡ.

**➔ Ни өсөн ял көндәрендә зыян аҙыраҡ?**

- Бында банктарҙың эшләмәүе лә йоғонто яһай. Һәм кешеләр ниндәйҙер проблема менән борсолмағанда, эштән ял иткәндә, күрәһең, эш көндәренә ҡарағанда уяуыраҡ була. Шәмбе-йәкшәмбелә дөйөм алғанда 1 миллион һум зыян күрелеүе ихтимал.

**➔ Йышыраҡ кем мутлашыусыларҙың ҡорбаны була? Алданған кешенең уртаса статистик портреты үҙгәргәнме?**

- Эйе, үҙгәрҙе. Әгәр элек башлыса пенсионерҙар йәки ауыл халҡы булһа, хәҙер урта йәштәгеләр ҙә, белемле кешеләр ҙә алданыуы ихтимал. Улар араһында табиптар ҙа, педагогтар ҙа, ғилми дәрәжәле юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары ла бар. Был даими үҙгәреүсе мутлашыу схемаларына бәйле. Әгәр элек осраҡлы рәүештә шылтыратһалар, хәҙер енәйәт ҡылыуға әҙерлек бара. Киберразведка ысулдарын ҡулланып, мутлашыусылар буласаҡ ҡорбанды урланған мәғлүмәттәр базаһы йәки сайттар ярҙамында өйрәнә. Улар зыян күреүсегә шылтыратҡанда психик тәьсир итеүҙең психологик алымдарын ҡулланып, нимәгә баҫым яһарға кәрәклеген беләләр. Улар үҙҙәрен психолог-белгестәр тип әйтмәй, әммә төп алымдарҙы үҙләштерә, алгоритмдар буйынса эш итә. Зыян күреүсегә яҡындары өсөн ҡурҡыу йәки аҡса аша тәьсир итәләр йәки уның ҡомһоҙлоғон уяталар, инвестициялар аша байырға тәҡдим итәләр. Ысулдар даими камиллаша һәм үҙгәрә. Халыҡҡа тиҙ яраҡлашыу ауыр. Әгәр элек "Һеҙҙең туғанығыҙ юл транспорты ваҡиғаһына эләккән" тигәнерәк бер схема популяр булһа, уны кешеләр аңланы һәм провокацияларға бармай башланы. Хәҙер барыһы ла белә, әгәр банк хеҙмәткәре шылтырата икән, был - алдаҡ. Әммә "Дәүләт хеҙмәттәре"нән йәки финмониторингтан шылтыратһалар, барыһы ла быға әҙер түгел, шуға күрә зыян күреүселәр бар.

**➔ Мутлашыуҙың күпме ысулы тураһында һүҙ алып барырға мөмкин?**

- Уларҙы һанау мөмкин түгел. Әгәр йыл башында бер нисә ысул булһа, йыл аҙағында бөтөнләй икенсе ысул ҡулланыуҙары мөмкин, улар үҙгәреп тора. Мәҫәлән, үткән йылдың август-сентябрь айҙарында мессенджерҙар аша инеү популяр булған. Мутлашыусылар "балам өсөн тауыш бир", "фотоконкурста минең өсөн тауыш бир" кеүек һылтанмалар ебәрә. Ә ғинуарҙа был ысул юҡҡа сыҡты.

**➔ Республикабыҙҙа киң таралған һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, табышлы 3 мутлашыу төрөн атағыҙ.**

- Беренсе урында "банктарҙың именлек хеҙмәте". Был төркөмгә классик мәғәнәлә банктың именлек хеҙмәте, шулай уҡ дәүләт хеҙмәттәренән, Үҙәк банктан, Федераль Хәүефһеҙлек хеҙмәтенән (ФСБ), Рәсәй тикшереүселәр комитетынан шылтыратыусылар инә. Енәйәт ҡылыу ысулы бер үк, тик сәбәбе бер аҙ үҙгәрә. Иң ҙур зыян ошо йүнәлештә. Әгәр кеше тоҙаҡҡа эләкһә, унан мөмкин тиклем аҡса "һурасаҡтар".

Икенсе урында - "инвесторҙар". Байлыҡҡа ынтылыусылар. Улар аҡсаны ҡайҙа һалырға белмәй, төрлө платформалар буйынса "инвестициялайбыҙ", "криптовалюта", "акциялар" кеүек иғлан эҙләй. Барыһы ла бәләкәй суммаларҙан башлана, һуңынан ставкаларҙы арттырырға тәҡдим итәләр. Шул уҡ ваҡытта уяулыҡты "йоҡлатыу" өсөн башта ҙур булмаған сумма күсерәләр. Кеше ныҡлап ышанғас, ул кредитка инә. Аҙаҡ шәхси кабинет бикләнә, барыһы ла юғала. Зыян миллиондан башлана һәм унан да юғарыраҡ.

Өсөнсө урында - төрлө тауар һәм хеҙмәт һатыу сайттары ярҙамында алдашыу. Бында ҙур зыян түгел, әммә осраҡтар күп. Кеше аҡса ебәрә, әммә тауарҙы алмай. Граждандарға һатып алыусы шылтыратып, хәүефһеҙ килешеү төҙөргә тәҡдим итә, уға фишинг һылтанмаһы ебәрә. Һатыусы уның буйынса аҡса күсерә.

**➔ Мутлашыусыларҙың портреты тураһында. Граждандарыбыҙҙы ҡайғы-хәсрәткә һалған кешеләр кем ул?**

- Юғарыла аталған топ-3-төң тәүге ике ысулы тураһында һүҙ барғанда, уларҙы табыуы бик ҡыйын. Был кешеләр махсус хеҙмәттәр ярҙамында эшләй. Өсөнсө ысул буйынса беҙҙең үҙебеҙҙең граждандар эшләй. Типик мутлашыусылар - 30 йәшкә тиклемге йәштәр. IT-белемгә эйә булыу мотлаҡ түгел. Бында афералар менән шөғөлләнеү өсөн айырым белем кәрәкмәй.

**➔ Ниндәй енәйәт иҫегеҙҙә ныҡ ҡалды һәм мутлыҡ ҡорбаны йәлләү тойғоһо уятты?**

- Ҙур зыян килтергән һәр енәйәт граждандарға төҙәлмәҫлек зыян килтерә һәм ҡыҙғаныу уята. Беҙҙә халыҡ бай тип әйтеп булмай. Ябай кеше өсөн бер миллион һум ғына түгел, хатта 100 мең һумды юғалтыу ҙа ауыр. Үҙ аҡсаһы юҡ, был - заём аҡсаһы. Кеше банк алдында бурыслы булып ҡала. Уны банкротлыҡ йәки биш йыл түләүҙәр буйынса һынау көтә. Иң яҡшы осраҡта - алдағы йылдарҙа мутлашыу ҡорбаны үҙен сикләйәсәк, иң насар осраҡта - бурыстарын ҡаплау өсөн күсемһеҙ милекте һатырға тура киләсәк. Мәҫәлән, Туймазы районында йыйыштырыусы булып эшләүсе ҡатын быйыл енәйәтселәргә 3,5 миллион һум күсергән. Банктан кредит алған. Уның рәсми эш хаҡы 15 мең һум һәм уға банк 3,5 миллион һумлыҡ кредит биргән. Нисек итеп? Өфөлә медицина хеҙмәткәре 11 миллион һум күсергән, был, әйткәндәй, әлегә республика буйынса антирекорд. Ул бөтә банктан да кредит алған. Кушнаренко районынан тағы бер "инвестор" 8 миллион һум аҡсаһын биргән - аҡсаһын да, машинаһын да һатты. Уны ярты йыл "эшкәрткәндәр". Һөҙөмтәлә бер нәмәһеҙ тороп ҡалған.

**➔ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың оператив кәңәшмәләрҙең береһендә әйтеүенсә, мутлашыу менән булған был хәлде туктатыу өсөн полиция нимә эшләй?**

- Бер туҡтауһыҙ иҫкәртеү эштәре алып барабыҙ. Барыһын да аңлатабыҙ, социаль әүҙем халыҡ, шулай уҡ студенттар һәм уҡыусылар, уларҙың ата-әсәләре менән эшләйбеҙ. Башҡа категориялар ҙа күп: эшләмәгәндәр, пенсионерҙар, улар менән участка хеҙмәткәрҙәре аша әңгәмә алып барабыҙ. Киң мәғлүмәт саралары аша хәбәр итәбеҙ. Ҙур сауҙа үҙәктәрендә банкоматтар янында беҙҙең хеҙмәткәрҙәр дежур итә. Финанс министрлығы, Үҙәк банк, Мәғариф министрлығы менән бәйләнештәбеҙ, Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы ведомство-ара эшсе төркөмдә эшләйбеҙ, унда кәңәшмәләр үткәрелә һәм иҫкәртеү буйынса идара итеү ҡарарҙары әҙерләнә. Хәҙер мутлашыуҙы иҫкәртеү буйынса өс йылға хөкүмәт программаһын булдырыу мәсьәләһе тикшерелә. Бында бөтә урындағы дәүләт власы органдары һәм хоҡуҡ һаҡлау структуралары йәлеп ителәсәк. Проблема ҡатмарлы һәм уны комплекслы хәл итеү мөһим.

Әммә күп нәмә кешенең үҙенә бәйле икәнен оноторға ярамай! Күпме генә: "Таныш булмаған номерҙы алмағыҙ! Ышанма! Яҡындарығыҙға кәнәш һорап йәки полицияға мөрәжәғәт итегеҙ! Ул ғына ниндәй һайлау яһарға икәнен хәл итә..." тип әйтмә, кеше үҙенсә хәл итә.

**Әйткәндәй, үҙеңде нисек һаҡлау буйынса кәңәштәр:**

- Интернет-магазинда һатып алғанда рецензияларҙы, һатыусы тураһында мәғлүмәтте өйрәнегеҙ, сайттың адресын тикшерегеҙ.
- Таныш булмаған кешеләргә мөһим мәғлүмәтте: карта номерын, CVC-кодты һ. б. кодтарҙы бирмәгеҙ.
- Шикле сайттарҙа банк картаһы мәғлүмәттәрен индермәгеҙ һәм онлайн-шопинг өсөн айырым карта ҡулланығыҙ.
- Таныш булмаған сайттарҙа социаль селтәрҙәрҙәге аккаунттар һәм мессенджерҙар аша авторизация үтмәгеҙ.
- Ике факторлы аутентификацияны үҙ иҫәп яҙмаларына инеү өсөн тоташтырығыҙ. Һәр аккаунт өсөн төрлө ҡатмарлы паролдәр ҡулланығыҙ һәм уларҙы даими яңыртығыҙ.
- Шикле хаттарҙы асмағыҙ һәм ышаныс һыҙ сығанаҡтарҙан файлдарҙы күсереп алмағыҙ.
- Таныш булмаған номерҙарҙан шылтыратыусыға яуап бирмәгеҙ. Спамдан һаҡлағыҙ һәм номерҙы билдәләүсе ҡуйығыҙ.
- Һәр ваҡыт мәғлүмәтте тикшерегеҙ һәм ашығыс ҡарарҙар ҡабул итмәгеҙ!

**✓ Беҙ тыуған еребеҙ хаҡында ни тиклем күберәк беләбеҙ, шул тиклем уны нығыраҡ яратабыҙ һәм киләсәк быуындар өсөн һаҡларға тырышабыҙ. Һәр бер тауҙың, һәр бер мәмерйәнең, һәр бер таштың асылыуын талап иткән үҙ сере бар.**



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТ ШИХАНДАРЫ...

## палеонтология хазинаһы улар

**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың мәҙәни-тарихи мираҫын һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләләренә иң юғары кимәлдә айырым иғтибар бирелә.**



Республика Башлығы Радий Хәбиров инициативаһы менән "Шүлгәнташ" ғилми-тикшеренеү комплексы асылды. Унда ташҡа соҡоп эшләнгән боронғо һүрәттәр репродукцияларының уникаль йыйылмаһы күрһәтелә, ә мәмерйә эсендә тиҫтәләгән мамонттарҙың палеолитик һүрәттәре Рәсәйҙә генә түгел, хатта бөтөн Көнсығыш Европала берҙән-бер яҡшы һаҡланғандарҙан һанала.

Төбәк властарының әүҙем булышлығында боронғо Хөсәйенбәк һәм Турахан мавзолейҙарынан йыраҡ булмаған урында шундай уҡ амбициоз "Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы" проекты ғәмәлгә ашырыла башланы. Бында ғалимдар ҡатнашлығында башҡорттарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли кейемдәрен, изге реликвияларын һәм биҙәүестәрен, һөнәри кәсептәрен һәм тарихи мираҫын сағылдырған объекттар төҙөләсәк.

Ишембай районындағы Торатау итәгендә алты күркәм тирмәнән хасил булған этно-ауыл беҙҙең яҡташтарыбыҙҙы һәм республика ҡунаҡтарын ҡабул итергә әҙер. Бында башҡорт еренең быуаттар төпкөлөнән һаҡланып ҡалған традициялары менән танышырға, милли кейем тегеү һәм башҡа әйберҙәрҙе эшләү буйынса ҡыҙыҡлы оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашырға, урындағы һөнәрмәндәрҙең сувенир коллекцияларын ҡарарға һәм һатып алырға була.

Башҡортостан тәбиғәте иртә Пермь дәүеренә ҡараған күп төрлө диңгеҙ хайуандары табылыуы менән дә үҙенә күрә уникаль булып иҫәпләнә. Рәсәй Фәндәр академияһы Палеонтология институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Алексей Мазаев әйтеүенсә, палеозой эраһының Пермь дәүеренә ҡараған барса урындары араһында Башҡортостан донъя ғалимдарында айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ошо ғалим-эксперт инде тиҫтә йыл самаһы палеонтологтарҙың шихандарҙы өйрәнеү буйынса федераль экспедициялары составында республикабыҙға даими килеп йөрөй. Ғалим бында наутилид тип аталған бер диңгеҙ хайуанының ғына ла 40-ҡа яҡын төрө табылыуын билдәләй. "Бындай нәмә донъяла бер ҡайҙа ла юҡ, бер урында ошондай тупланыш булыуы ғәжәпләнерлек. Стәрлетамаҡ районында беҙ иң китмәле хәлгә юлыҡтыҡ. Эш шунда, баш аяҡлы моллюскыларҙың үрсеү циклы үтә ҡыҙыҡлы. Улар араһында моноцикликтар тип аталғандары йәшәгән осоронда бер генә тапҡыр үрсей ала: үҙҙәре хасил булған урынға йөҙөп киләләр, парлашалар һәм үләләр. Инә моллюскылар бәләкәйҙәрен һаҡлап тора, хәҙерге һигеҙаяҡтар (осьминогтар) ҙа шулай итә. Ә шихандар, асылда, уларҙы үҫтереп еткереү өсөн үҙенсәлекле "балалар баҡсаһы" булып торған. Был тауҙарҙы хасил иткән эзбизташ биоген сығышлы, былар барыһы ла ниндәйҙер ҡабырсаҡтарҙың ҡалдыҡтары. Бик күп хайуандарҙың һөлдәһе карбонаттан хасил була. Шулай уҡ ылымыҡтарҙа ла уларҙы һаҡлай торған карбонат киҫәксәләре була. Ылымыҡтар хәҙер ҙә коралдар менән төп риф төҙөүселәр булып ҡала. Бына тап Шәкетауҙа (Шахтауҙа) рифтарҙы хасил итеүсе комплекстарҙың бер-береһен нисек итеп эҙмә-эҙлекле алыштыра барыуы бик асыҡ күренә", - тип ғалим күҙәтеүҙәре менән бүлеште.

Алексей Мазаев Башҡорт шихандары планетабыҙҙа ҡасан да булһа хасил булған риф системаларының иң ҙурҙарының бер өлөшө, тигән һығымтаға килә. Быраулау һөҙөмтәләре һәм геофизик мәғлүмәттәр буйынса ошондай риф сылбыры Каспийҙан Яңы Ер тундраһына тиклем һуҙыла. Торатау, Ҡуштау йә иһә Йөрәктау түбәләренән, айырыуса аяҙ көндә, Пермь диңгеҙенең төбөн күреп була.

"Пермь диңгеҙенең төбө 280 млн йыл элек яҡынса ошолай күренгән. Йәғни, яҡынса һыу кимәлен дә күҙ алдына килтереп була, ул шихандарҙың түбәһенә тиклем етә яҙған. Улар яҡынса 9 млн йыл үҫә барған. Ул ваҡыттарҙа континенттар һыу аҫтында ята, бөтөн Көнсығыш Европа платформаһы өҫтөн тәрән булмаған диңгеҙ ҡаплаған була, уның максималь тәрәнлеге 150 метрға етә. Көнсығыш Европа платформаһы буйлап тәрән һыулы ҡултыҡ үтә, иртә Пермь дәүерендә ул билдәле бер кимәлдә тарайған була, һәм континенттар бик тиҙ яҡыная бара. Ошондай коллизия арҡаһында платформаның сите әкренләп түбәнәйә бара. Шуға күрә рифтар киңлеккә үҫә алмай һәм ошондай конус формаһын ала. Шулай булғас, шихандарҙың тышҡы күренешен "тәбиғәт уйыны" тип ҡарап булмай. Был уникаль ситуация. Пиннакл (башня, сатыр) формаһындағы ошондай грандиоз масштабтағы Пермь рифтары донъяның башҡа бер тарафында ла юҡ", - тип асыҡлыҡ индерҙе ғалим.

Мазаев ошо үтә бай тәбиғи мираҫты һаҡлау һәм өйрәнеү маҡсатында Торатауҙа геологик музей төҙөргә тәҡдим итә. Шәкетау шиханында йыйып алынған экспонаттарҙың күбеһе - донъя кимәлендә танылыу тапҡан фән әһелдәре өсөн бик теләп өйрәнә торған объект. Шәкетауҙың ҡоролошон тикшереп, ватан геологтары һәм палеонтологтары иҫ киткес асыштар эшләне һәм Башҡорт шихандарының геологик тарихын асыҡланы.

"Был ябай музей ғына булмаясаҡ, бында объектив факттар нигеҙендә беҙҙең планетабыҙҙың нисек формалашыуы хаҡында мәғлүмәт биреүсе фәнни-мәҙәни үҙәк буласаҡ. Ошо тау тоҡомдарында, ошо таш йылъяҙмала беҙ тормоштоң даими үҙгәрә барыуын күрәбеҙ. СССР-ҙа 1937 йылда тәү тапҡыр уҙғарылған халыҡ-ара геологик конгресс барышында ошо төбәктә шихандар булыуы барыһына ла билдәле була, шунан бирле бөтөн донъя геологтары бында килергә тырыша. Был пиннаклдарҙы нефть коллекторҙары тип әйтеп була. Беренсе башҡорт нефте, бер үк ваҡытта ул беренсе совет нефте лә, Ишембайҙа Торатау кеүек рифтан алына, тик ул бер саҡрымдан артығыраҡ тәрәнлектә ер аҫтында ҡалған риф. Шулай итеп, музей шихандарҙы беҙгә яңыса күрһәтәсәк. Башҡорт шихандары - төбәк йә иһә федераль кимәлдә генә түгел, донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә", - тип, ышаныслы рәүештә белдерҙе тикшеренеүсе.

Палеонтология институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Алексей Мазаев фекеренсә, һүҙ барған проектты республика етәксеһе Радий Хәбиров булышлығында ғына ғәмәлгә ашырып буласаҡ. "Беҙ 2015 йылдан бирле Башҡортостанға даими рәүештә килеп йөрөйбөҙ, һуңғы 4-5 йыл эсендә бында колоссаль прогресс күренә. Төбәк властары ошо тарихҡа битараф түгел. Беҙ тыуған еребеҙ хаҡында ни тиклем күберәк беләбеҙ, шул тиклем уны нығыраҡ яратабыҙ һәм киләсәк быуындар өсөн һаҡларға тырышабыҙ. Һәр бер тауҙың, һәр бер мәмерйәнең, һәр бер таштың асылыуын талап иткән үҙ сере бар. "Торатау" геопаркының бер нигеҙе булараҡ, геологик музей бик тә кәрәк. Геопаркҡа килеүселәр боронғо рифтарҙың бөйөклөгөн генә күреп-тойоп ҡалмаҫ, уларҙың ғәжәп тарихы һәм күптән бөткән диңгеҙҙәрҙе һәм океандарҙы төйәк иткән боронғо хайуандар менән таныша аласаҡ. Көнсығыш Европа платформаһы ҡырыйында, Пангея формалашыуының финал стадияһы урынында йәшәүегеҙҙе аңлап, һеҙ үҙегеҙҙең территорияғыҙға бөтөнләйгә икенсе мәғәнә һаласаҡһығыҙ. Был бөтөнләйе менән икенсе кимәл. Башҡортостан Башлығы колоссаль эш алып бара, геопарк статусын алыуға өлгәшеү үҙе лә еңел түгел, бында бюрократик кәртәләр етерлек, һәм теләһә ҡайһы ил быны башҡара алмай. Бының менән "ауырыу" фарыз, шәхси ҡыҙыҡһыныусанлыҡ бик мөһим. Былар бик кәрәкле, бик дөрөҫ аҙымдар, улар кешеләрҙе берләштереүгә булышлыҡ итә", - тине Алексей Мазаев.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

1-се Белорус фронты артиллерия командующийының 1945 йылдың 21 февралендәге бойороғо менән 60-сы гв. атлы полкының артиллерия командующийы, гв. майоры Мөтиғуллин Сафа Ғабдрахман улы Александр Невский орденына лайыҡ була; 16-сы гв. атлы дивизияһының артиллерия штабы начальнигы, гв. майоры Горлинский Евгений Павлович I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә. 1-се Белорус фронты артиллерия командующийының 1945 йылдың 3 мартындағы бойороғо буйынса 60-сы гв. атлы полкының миномет батареяһы командиры, гв. өлк. лейтенанты Ческидов Николай Леонтьевич Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә, шул уҡ командующийҙың 1945 йылдың 4 мартындағы бойороғонда 16-сы гв. атлы дивизияһының артиллерия командующийы, гв. полковнигы Вәлиев Мөнир Миңдеяр улының да шулай уҡ Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булыуы хаҡында әйтелә.

* * *

Варшава-Познань операцияһы - Бөйөк Ватан һуғышының иң ҙур фронт операциялары иҫәбенә инә. 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәре тәүҙә дошман позицияларына бер нисә участкала 34 км киңлегендәге арауыҡта үтеп инһә, операция аҙағында уны фронт буйынса 500 километрға киңәйтеп, немец ғәскәрҙәрен 500 километрға тиклем туҡтауһыҙ сигенеүгә дусар итә, һөҙөмтәлә Польшаның көнбайыш өлөшө тулыһынса азат ителә. Һөжүм башланыуға 4 көн үтеүгә фронт ғәскәрҙәре, дошман оборонаһын барса оператив тәрәнлегендә емереп, 100 - 130 километрға тиклем алға үтә. 18 ғинуарҙа совет ғәскәрҙәре немец частарын хәл иткес эҙәрлекләүгә күсә. 22 ғинуарҙа беҙҙең танк армиялары дошмандың Познань оборона рубежына сыға. 25 ғинуарҙа 1-се гвардия танк армияһы, Варта йылғаһы аша сығып, Одер йылғаһына табан көслө һөжүмен дауам итә. 26 ғинуарҙа танк армиялары элекке Германия-Польша сигенә тиклем барып етә. 28 ғинуарҙа 2-се гв. танк армияһы немецтарҙың Померан валындағы көслө оборонаһын емерә. 29 ғинуарҙа 1-се гв. танк армияһы, 8-се гвардия, 33-сө һәм 69-сы армиялар, дошмандың Мезериц нығытылған районына йырып керә һәм Германия территорияһына үтеп инә. 31 ғинуарҙа 2-се гвардия танк армияһының һәм 5-се Удар армияның авангардта барған частары Одер йылғаһына барып етә. 3 февралдән кисенә фронттың үҙәк һәм һул ҡанаты ғәскәрҙәре Одер йылғаһының уң ярындағы немец частарын тар-мар итә, ә йылғаның һул яҡ (көнбайыш) ярында, Кюстрин ҡалаһынан төньяҡтараҡ һәм көньяҡтараҡ плацдарм ала (Кюстрин плацдармы).

Варшава-Познань операцияһы совет ғәскәрҙәренең тағы ла ҡеүәтлерәк булған Висла-Одер стратегик операцияһының бер өлөшө итеп иҫәпләнә. Фашист ғәскәрҙәренә емергес һөжүмдә дүрт фронт армиялары ҡатнаша: 1-се Белорус, 1-се Украин, 2-се Белорус фронтының һул ҡанаты һәм 4-се Украин фронтының уң ҡанаты.

1-се Белорус, 1-се Украин фронттары һөжүм иткән участкаларҙа беҙҙең тере көстәр һәм хәрби техника дошман ғәскәрҙәренекенән күпкә өҫтөнөрәк була.

Висла-Одер операцияһы һөҙөмтәһендә совет ғәскәрҙәре Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы менән, шулай уҡ поляк партизандары булышлығында Польшаның көнбайыш һәм көньяҡ өлөшөн дошмандан таҙарта, уның 25 дивизияһын ҙур юғалтыуҙарға дусар итә, 35 дивизияһын тулыһынса юҡ итә, 147,4 мең һалдат һәм офицерын әсиргә ала, 14 меңгә яҡын орудиеһын һәм минометын, 1,4 меңгә яҡын танкыларын һәм штурм орудиеларын, башҡа хәрби техникаһын һәм хәрби кәрәк-яраҡтарын ҡулға төшөрә. Һөҙөмтәлә Померанияла, Силезияла һәм Берлин йүнәлешендә дошманға хәл иткес һөжүм башлау өсөн уңайлы шарттар булдырыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Башҡортостанға мин ике позициянан сығып иғтибар иттем. Тәүгеһе - ҡурай, икенсеһе - ҡымыҙ. Башҡорт ҡымыҙы бөтөнләй икенсе төрлө, сөнки уны яһау шарттары башҡа.*



**Гәзиттең 2008 йылдағы бер һанында (№36, 6 сентябрь) "Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ" тигән әңгәмәлә Йылайыр районының Ҡәҙерша ауылы аҡһаҡалы Нуретдин Хәсән улы Игебаев халҡыбыҙҙың кешелек донъяһында тотҡан урыны хаҡында шундай һүҙҙәр әйткәйне:**

**"…Ошо һүҙ йәһәтенән башҡорттар Урал төбәгендәге иң рәхмәтле халыҡтыр. Күпме халыҡ вәкилдәрен суҡындырыуҙан, крепостнойлыҡ ҡоллоғона төшөүҙән, аслыҡ-яланғаслыҡтан, ҡырылып бөтөүҙән йолоп ҡалған, үҙебеҙгә һыйҙырған милләт беҙ…**

**…Минең уйымса, нәҡ ошо көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе башҡорттарға башҡорт милләте алдында ғына түгел, барлыҡ мосолман донъяһы, кешелек алдында оло миссия һалынған. Һуңғы ваҡытта күп кенә халыҡтарҙың үҙҙәренең тәүсығанағы итеп ошо төбәкте күрергә тырышыуы ла юҡҡа ғына түгел. Сөнки бында тере саҡтарында уҡ Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған суфыйҙар, әүлиәләр ерләнгән. Был ерҙә йәшәү, ғүмер итеү - өҫтөнлөк түгел, оло яуаплылыҡ. Арҡайым ҡаласығы ла юҡҡа ғына ошонда түгел, юҡҡа ғына "Урал батыр" эпосы ла ошо төбәктә һаҡланып яҙып алынмаған. Әгәр ҙә изге әүлиәләребеҙҙең һөйәктәре һаҡланған ерҙе башҡаларға һатһаҡ, уны ситтәргә мыҫҡыл итергә бирһәк, Аллаһы Тәғәлә бының өсөн беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, беҙҙең дә, кешелектең дә һәләкәте ошонан башланасаҡ. Был төбәктең ана шундай әһәмиәткә эйә булғанлығын башҡаларға аңлатыр өсөн иң тәүҙә үҙебеҙгә быны тәрән итеп аңларға һәм инанырға кәрәк. Ә инде инаныуҙың берҙән-бер һәм хаҡ юлы - дин юлы…"**

# АЛТЫНСЫ

## ҡурай, ҡымыҙ,



***Ҡурайҙың кешегә йән өрөрлөк ҡөҙрәте барлығын аңлау менән бер рәттән, мин башҡорттарҙың нисек һөйләшеүенә иғтибар иттем. Башҡорт кешеһе ҡурай уйнағанда нисек итеп һулыш ала, нисек итеп һулышын сығармай тороп, шунан яйлап сығара, һөйләшкәндә лә шулай итә. Һуңынан тағы ла шуға иғтибар иттем: Башҡортостанда йәшәгән һәр кем, милләтенә ҡарамайынса, башҡорттар кеүек тын ала. Шуға күрә улар үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәре тип атаһа ла, улар ҙа шул уҡ башҡорт. Мин дә бында саҡта үҙемде башҡорт тип иҫәпләйем.***

Нуретдин олатай һуңғы һулышына тиклем ошондай инаныу менән йәшәне: милләтебеҙ һәм динебеҙ өсөн изге ғәмәлдәр атҡарҙы, үҙе йәшәгән төбәк, республика, төбәк-ара кимәлдә дини саралар ойошторғанда гел уртала йөрөнө һәм шундай инаныу менән баҡыйлыҡҡа күсте. Рәхмәтле булып йәшәне. Иншалла, ожмах түрҙәре насип булһын үҙенә!

"Һәр кемдең күңеленә үҙ милләте яҡын, ғәзиз (хатта терпе лә балаһын "йомшағым!" тип иркәләй!), шуға күрә үҙ халҡы хаҡында бындай фекерҙәр әйтеүсене аңларға була..." тип ысҡындырыр берәү. Улайһа, шуға хәҙер инде беҙҙең милләттән булмаған Светлана Марченконың башҡорт халҡы, уның туған теле, Башҡортостан хаҡында әйткән һүҙҙәрен килтерәйек:

***"...Ә хәҙер, зинһар өсөн, үтә иғтибарлы булығыҙ. Лев Гумилев "пассионар этәргес көс" ("пассионарный толчок") төшөнсәһен ҡыйыу рәүештә индерҙе. Беҙ иһә "хронональ этәргес көс" ("хрональный толчок") төшөнсәһен индерәбеҙ. Ул нимәне аңлата һуң? Донъяның тулыһынса һәм бөтөнләй алмашыныуы. Алмашыныу шул тиклем тиҙ бара, хатта донъя уны һиҙмәйәсәк. Кешелек был процестың булғанлығын кешеләрҙең фекерләүенә ҡарап ҡына билдәләйәсәк. Беҙ үҙ тарихыбыҙҙа бындай хәл-күренештәрҙе кисерҙек тә инде. XIII быуатта төп суперэтнос Литва территорияһында формалашҡан. Хәҙер ул Башҡортостан ерендә барлыҡҡа килә. Башҡортостан өсөн ниңә мөһим был хәл? Хәҙерге ваҡытта литва теле диалектынан башҡорт теленә тауыш йышлығы күсеү процесы бара. Шуға күрә, башҡорт милләте тиҙҙән ҙур үҫеш кисерәсәк. Башҡорт халҡы билгән ерҙәр ҙә сәскә атасаҡ... Башҡорт телендә тәбиғәттең тамаҡ өндәре бар, шуға күрә ул тәбиғәт менән үҙ-ара мөнәсәбәтте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк..."***

Хәҙер инде Нуретдин олатай Игебаев менән Светлана Марченконың әйткән һүҙҙәрен йәнәш ҡуйып ҡарайыҡ. Уларҙың тәүгеһе дәлилдәрен дин, Аллаһы Тәғәлә менән бәйләп килтерһә, икенсеһе башҡорт теле үҙенсәлеген төп дәлил итеп килтерә. Тәү ҡарамаҡҡа, бында төрлө төшөнсәләр хаҡында һүҙ барған һымаҡ. Бында ошо ике сығанаҡты бәйләүсе өсөнсө дәлил талап ителгәне көн кеүек асыҡ.

***Бар ундай сығанаҡ. Күптән түгел Өфөлә боронғо мәҙәниәттәрҙе һәм традицияларҙы, цивилизацияларҙы өйрәнеүсе, даосизм алхимияһы буйынса 50-нән ашыу китап авторы, танылған ғалим Олег Чернэ булып китте. Ул 180-дән ашыу илдәрҙә булған. АҠШ-тың Чикаго университеты уны ДНК-ны өйрәнеү буйынса яҙған хеҙмәттәре өсөн Нобель премияһына тәҡдим иткән. Өфөлә Олег Михайлович, һәр минуты ике йыл алдан уҡ көн тәртибенә яҙылып ҡуйылыуға ҡарамаҫтан, бер нисә семинар үткәрҙе, медицина университетында лекция һөйләне, Башҡортостан "Юлдаш" телевидениеһының "Сәләм" тапшырыуында сығыш яһаны һәм бер төркөм журналистар менән осрашырға ваҡыт тапты. Түбәндә уның әңгәмәһенең бер өлөшөн килтерәбеҙ:***

### Үҙ-үҙемә юл

Яҙмышым үтә ябай. Ҡыйыҡтан ҡолап төшөүем арҡаһында һаулығымды юғалтыуым үҙ-үҙем менән көрәшеү ихтыяжын барлыҡҡа килтерҙе. Юғары техник белем алдым. Медицина буйынса тулы булмаған юғары белемем бар, иң мөһиме, мин унда биохимияны өйрәндем. Һаулығымды нығытыу, үҙемде камиллаштырыу маҡсатында Ҡытайҙа медицина институтында уҡыным. Рухи етәксемдән аңымды бер урынға туплап, донъяға диҡҡәт менән ҡарарға өйрәндем. Был саҡта социумда йәшәй алмаҫымды аңланым. Шуға күрә, иң тәүҙә фатирға бикләндем. Атайым самбо буйынса Рәсәй чемпионы ине, миңә ошо юл менән китергә физик көсһөҙлөгөм ҡамасаулаңы. Каратэ менән шөғөлләнеп, аңһатыраҡ юл һайланым. Аҙаҡ тотош ил каратэ менән мауығып, үҫмерҙәр тәртипһеҙ рәүештә һикерешә башлағас, уның да ҡыҙығы бөттө. Социумдан дәрүиш булып китергә ҡарар иттем. Тәүге "тәҙрә" асылыу менән ҡуҙғалдым. Иң тәүҙә Ҡытайға барып рухи уҡытыусыларымды таптым. Ундағы тауҙарҙа оҙаҡ ваҡыт яңғыҙ аскет булып йәшәнем. Аҙаҡ аңымды бер урынға туплай алмаһам, оҙаҡ йәшәй алмаясағымды төшөндөм. Сөнки ул саҡта үҙемдең тереме-юҡмы икәнлегемде лә аңларлыҡ хәлдә түгел инем.

43-45 йәшемә генә кире социумға әйләнеп ҡайта алдым. Уға тиклем бер нисә урында, шул иҫәптән Башҡортостанда булдым. Ул саҡта совет осоро ахырында популяр һаналған Америка ғалимы һәм яҙыусыһы, антрополог, этнолог Карлос Кастанеда менән мауыҡтым. Уның китаптары мине Өфөгә алып килде, мине бында ҡунаҡҡа саҡырҙылар. Килеп төшкәс тә үҙем өсөн таныш булмаған хәл-күренештәргә иғтибар иттем. Мине бындағы кешеләрҙең бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтөүе, һөйләшеүе аптыратты, хатта күңелемдә быға ҡаршы протест тойғоһо барлыҡҡа килде. Һуңынан ғына аңланым: мин эҙләгәнемде тапҡанмын икән. Һәр төбәк киңлек, ғаләм менән үҙенсә мөғәмәлә формаһын төҙөй.

Ул саҡта Өфө һәм уның тирәһендә хәҙерге кеүек төҙөлөштәр юҡ ине әле. Аэропорттан ҡалаға тиклем барғанда үҙемде сүллектә итеп тойҙом. Гүйә, виртуаль донъяға барып эләктем. Аңлайышһыҙ монарға сорналдым. Артабан ошо күренештең асылын өйрәнергә тотондом. Иң тәүҙә мин бында киңлектең (пространство) һулыш алғанын аңланым. Киңлек менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора белеү ҙә мөһим. Һин уға нимә бирәһең, ул да һиңә шуның менән яуап ҡайтара. Джунгли шамандары, мәҫәлән, киңлек менән мөнәсәбәткә ингәндә уны тере итеп тоя. Мөнәсәбәттәр тоҙағына инмәҫ өсөн мин, мәҫәлән, тәүге ун биш йылда үҙ-үҙем менән көрәштем, һуңынан үҙемдә көс туплай башланым. Хатта үҙемде аслыҡтан азат итер өсөн оҙаҡ ваҡыт ашамай ҙа тора алам. Күп осраҡта мамыҡ һымаҡ осоп китмәҫ өсөн генә туҡланам. Әлеге ваҡытта тәүлегенә бер тапҡыр кис нимәлер ашайым. Был асығыуҙың файҙаһы тураһындағы фәнгә ҡарамай, үҙ-үҙемә табан барған юл мине шуға алып килде. Бөгөн шундай йәшәү рәүешен һайлаған йөҙҙәрсә шәкертем бар.

Һәр бер эштә иң ҡурҡынысы - ҡабаланыу һәм көтөү. Нимәнелер көтөргә ярамай, ә нимәлер эшләргә кәрәк. Беҙ һәр ваҡыт үткәнгә ҡарай башлайбыҙ һәм киләсәкте көтәбеҙ, шул уҡ ваҡытта хәҙерге менән йәшәмәйбеҙ. Ә инде киләсәк килеп еткәс, уны лайыҡлы итеп йәшәй алмайбыҙ, сөнки беҙ хәҙерге менән йәшәргә өйрәнмәгәнбеҙ. Артабан шул киләсәктә беҙ артабанғы киләсәкте көтә башлайбыҙ. Минең өсөн ял, күңел асыу тигән төшөнсәләр юҡ. Футбол ҡарағанда, мәҫәлән, мин уйынсыларҙы үҙенсәлекле гендары булған һирәк осрай торған кешеләр булараҡ өйрәнәм.

### Ҡурай һәм ҡымыҙ ҡөҙрәте

Башҡортостанға тәүге тапҡыр килеүемә 25 йыл үтеп тә киткән. Тәүге килгәнемдән алып бында бик күп үҙгәрештәр күҙәтелә. Үҫеш бында дауам итә. Әле бында психологик циркуляция етешмәй, бының өсөн яҡшы юлдар, күперҙәр кәрәк буласаҡ. Психологик арыу юҡҡа сығырға тейеш. Әгәр ҙә ниндәйҙер ситуация килеп сыға икән, беҙ уны иң тәүҙә ҡабул итергә, шунан һуң ғына унан сығыу юлын эҙләргә тейешбеҙ. Ә инде ситуацияны ҡабул итмәйенсә тороп, күпте теләй башлаһаң, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Аҡса беҙгә тышҡы ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн түгел, ә рухи көсөбөҙҙө арттырыу өсөн генә кәрәк.

Башҡортостанға мин ике позициянан сығып иғтибар иттем. Тәүгеһе - ҡурай, икенсеһе - ҡымыҙ. Тәүге тапҡыр ҡымыҙҙы Ҡаҙағстанда тәмләп ҡараным. Башҡорт ҡымыҙы бөтөнләй икенсе төрлө, сөнки уны яһау шарттары башҡа. Икенсенән, бындағы ер киңлек, ғаләм энергияһы менән ныҡ туҡлана. Ҡымыҙҙы тәмләп, шул киңлектең көсөн аңланым.

Ул саҡта "Алхимия" журналы сығара инем. ***Боронғо халыҡтарҙың мәҙәниәтен, боронғо цивилизацияларҙы өйрәнгән кеше булараҡ, Роберт Юлда-***

***✓ Һәр бер этностың юғары аң донъяһына сыға торған киңлектәге юлы була. Мәҫәлән, фарсылар унда Арҡайым аша сыҡҡан. Уларҙың вариҫтары - башҡорттар. Суфыйсылыҡ ағымын да башҡорттар барлыҡҡа килтергән.***



***шевты таптым. Унын курай моңон тыңлап, журнал өсөн интервью алдым. Роберт Юлдашевтың ҡурай моңон тыңлағанда мин ваҡытты, үҙемдең ниндәй дәүерҙә йәшәгәнлегемде онотам, үҙемде сикһеҙ киңлектә йөҙгән азат кеше итеп тоям.***

Һәр халыҡ ниндәйҙер маҡсат менән барлыҡҡа килә. Һәр этностың тәүтормош һәм унан һуңғы формашалыу осоро була. Тәүге осорҙа яҙыу булмаған, әммә кешеләр музыка ҡоралында уйнап, үҙ-ара аралашҡан. Музыка һүҙҙәргә ҡарағанда тиҙ ваҡыт эсендә бер кешенең уйкисерештәрен, аҡылын башҡаларға еткерергә һәләтле. Ошонан сығып ҡарағанда боронғо башҡорт өсөн ҡурайҙың ниндәй әһәмиәткә эйә булғанлығын аңлауы ҡыйын түгел.

### Башҡорт теле

Ҡурайҙың кешегә йән өрөрлөк ҡөҙрәте барлығын аңлау менән бер рәттән, мин башҡорттарҙың нисек һөйләшеүенә иғтибар иттем. Башҡорт кешеһе ҡурай уйнағанда нисек итеп һыасҡысы Башҡортостанда. Шуға күрә мин үҙемдең коллегаларыма йыл ярым элек үк Башҡортостан өҫтөндәге интеграл яланды ремонтлау зарурлығы хаҡында һөйләй башланым. Әгәр ҙә быны эшләмәһәк, барыбыҙға ла бәлә киләсәк. Башҡортостан был йәһәттән Рәсәй өсөн генә түгел, барлыҡ донъя өсөн дә мөһим. Мин ҡыҙыҡлы кешеләр, 11-се, 12-се интеграл ялан вәкилдәре менән осраштым. Мин уларға: "Әйҙәгеҙ, Башҡортостан яланын ремонтлайыҡ..." - тием. Бер йылда ғына бында донъя кимәлендә әллә күпме ваҡиғалар булып үтте. Беҙ ремонт эшенә тотондоҡ. Бер мәл был ерҙән сыҡҡан нур яҡтылығы донъяға тарала башланы.

Күптәр быны эзотерикаға тиңләр. Минең өсөн ул эзотерика түгел, ә физика. Мәҫәлән, минең коллегаларым Ирәмәл тауында нур күрә. Улар башҡалар күрмәгәнде күрә ала. Башҡортостанда ундай урындар бик күп. Минең ҡарамаҡҡа, Шүлгәнташта Башҡортостандың киләсәктәге тормошо хаҡында мәғлүмәт ята. Учалы районының Әүешкүл тауындағы әүлиә ул бер ҡайҙа ла китмәй, ябыла. Уны үҫтереү өсөн ҡурай менән ҡымыҙҙы файҙаланырға була. Башҡортто мин һәр көнөн һуңғы көнө итеп йәшәүсе мәмлүк итеп күҙ алдына килтерәм. Грузияла ла мәмлүктәр ҡануны буйынса йәшәүсе бер халыҡ бар. Шуға күрә, минең аңлауымда башҡорт -ул камил кеше тигәнде аңлата. Башҡорттар киләсәктә нимәнелер һаҡлар өсөн үҙҙәрендә шундайын сифат тупланмышын барлыҡҡа килтергән халыҡ. Кока-кола эсеү менән ҡымыҙ эсеү араһында ниндәй айырма бар тип уйлайһығыҙ? Башҡорт кешеһе быны бик яҡшы белә. Ни өсөн тигәндә, кока-кола эскән кеше үҙен эске яҡтан емерә. Ҡымыҙ, киреһенсә, башҡортто энергетик яҡтан нығыта ғына.

### Ҡурай уйнаған кеше

Урманға аяҡ баҫыусы кеше үҙенең энергетик яҡтан көслө урынға килеүен аңларға тейеш. Ни өсөн тигәндә, үҫемлектәр беҙгә ҡарағанда күпкә көслөрәк. Уларға кислород кәрәкмәй, фат. Башҡорт кешеһе артынан нур эйәрә. Шуға күрә лә Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем башҡорт. Кемдер быны аңламай һәм танымай икән, быының өсөн асыуланырға ярамай. Сөнки асыу тойғоһо аңламағандарҙы, киреһенсә, тоҡандыра.

### Дин һәм толерантлыҡ

Мин дини кеше түгел, әммә ниндәйҙер кимәлдә даосизм яҡлы. Аллаһы Тәғәләне геометрия формаһында ҡабул итәм. Тик уны геометрияға таянып аңлата башлаһам, һәр ваҡыт кире реакцияға дусар булам. Икенсе төрлө әйткәндә, мин юл кешеһе. Мин бөтә нәмәне ҡабул итәм һәм һәр нәмәлә файҙа эҙләйем. Рухты физик, молекуляр кимәлдә өйрәндем. Шуға күрә мин уға хыянат итә алмайым. Сөнки был осраҡта үҙемдең молекуляр тәбиғәтемә хыянат итер инем.

Һәр бер дин - ул кешеләрҙе ниндәйҙер йүнәлешкә көйләү. Донъяла күпме кешеләр төрлө диндәргә бирелә, әммә улар башҡа диндәгеләргә яҡшы ҡараш түгел. Дини китапта "Яҡмөнәсәбәтен ихтирам итергә тейеш. Мәскәүҙә Афғанстан илсеһенә Руми премияһын тапшырғанда баш ҡалала йәшәүсе егермеләп урыҫ телле афғандар менән аралашырға тура килде. Улар барыһы ла миңә толерантлыҡ хаҡында аңлатырға теләне. Мин уларға: "Мин һиңә толерантлы, мин һиңә толерантлы, тип әйтеү менән генә бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк", - тип яуап бирҙем. Ни өсөн тигәндә, ғәҙәттә, дуҫлыҡ хаҡында һүҙ барған ерҙә ысын дуҫлыҡ булмай, унда йыйылыусылар таралашыу менән дуҫлыҡ ҡына түгел, ихтирам тойғоһо ла юҡҡа сыға. Миңенсә, кешеләрҙең был мәсьәләгә ҡарашын үҙгәртергә кәрәк. Бында лозунгылар кәрәкмәй. Лозунгылар, ғәмәлдә, киреһенсә эшләй.

Мин эзотерик түгел. Шул уҡ ваҡытта Үҙәк телеканал аша үҙем аңлағанды башҡаларға аңлатҡым да килмәй. Үҙемдең уҡыусыларым бар, уларҙы нимәгәлер өйрәтәм. Мәҫәлән, һулыш алыу энергияһы дәресе бирәм уларға. Бында физика һәм медицина хаҡында һүҙ ба-

# ИНТЕГРАЛ ҺӘМ...

## башҡорт теле тураһында

лыш ала, нисек итеп һулышын сығармай тороп, шунан яйлап сығара, һөйләшкәндә лә шулай итә. Һуңынан тағы ла шуға иғтибар иттем: Башҡортостанда йәшәгән һәр кем, милләтенә ҡарамайынса, башҡорттар кеүек тын ала. Шуға күрә улар үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәре тип атаһа ла, улар ҙа шул уҡ башҡорт. Мин дә бында саҡта үҙемде башҡорт тип иҫәпләйем. Быға тиклем үҙемә аңлайышһыҙ булған нәмәне инҡар итә торғайным. Хәҙер улай итмәйем: мин ситтән күҙәтергә, өйрәнергә тотондом.

Ысынын әйткәндә, башҡорттар үҙенең телендә, тәбиғәтендә, музыкаһында нимәнелер һаҡлай. Ул киләсәкте әҙерләү өсөн контейнерҙы хәтерләтә. Башҡорттар нимәнелер көтә. Яңыраҡ Сирияла ваҡиғалар башланғас, мин ундағы ваҡиғаларҙы икенсе юҫыҡта аңланым. Ул Рим империяһында күҙәтелгән ҡыйратыу өсөн ҡыйратыуға ҡоролған глобаль ваҡиғаларҙы хәтерләтә. Римляндар был саҡта ниндәйҙер гипнозға бирелгәндер тип иҫәпләйем, тап шуның кеүек аңға һыймаҫлыҡ ҡанлы ваҡиғалар барған Сирияға барыһы ла ынтыла. Гүйә, киңлектең ундағы халыҡтың мейеһен һүндергән кеүек күрҙем. Мин бында молекуляр бәйләнеш боҙолған киңлекте, ғаләмде күрәм. ДНК-ның интеграл яландарын күҙ алдына килтереп ҡараһаң, ДНК 12 сылбырҙан тора. Хәҙерге ваҡытта күп кенә кешеләрҙең ДНК яландары боҙолған, сөнки киңлек ДНК-һында уҡ проблемалар барлыҡҡа килгән. Мин иһә молекуляр кимәлдә 6-сы интеграл яландың боҙолғанын күрҙем. Был яландың ҡәберендә лә нур күренә. Бындай урындар Башҡортостанда бик күп һанда. Уларҙы өйрәнергә һәм аяҡҡа баҫтырырға, тәртипкә һалырға кәрәк. Хәҙерге ваҡытта йөҙләгән кеше энергетик планда был урындарҙы рәткә килтереү өҫтөндә хеҙмәт итә. Улар ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшеүе булды, Сириялағы ваҡиғалар ыңғай юҫыҡ алды. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, Башҡортостан киңлегендәге энергетик хәл-торош Ер шарының башҡа урындарында ошо сөнки углекислый газ ярҙамында йәшәйҙәр. Үҫемлектәрҙә энергия туҡтауһыҙ регенерация үтә. Беҙ иһә кислородты яндырабыҙ ғына. Мин тынлы музыка ҡоралдары яҡлы, сөнки улар аҙға ғына булһа ла һулыш алыуҙы сикләй. Мәҫәлән, ҡурайсы башҡаларға ҡарағанда аҙыраҡ һулыш ала. Бында инде бөтөнләй башҡа төрлө биохимия. Был йәһәттән ҡарағанда ла, ҡурай уникаль күренеш.

Башҡорт теленә килгәндә лә шулай. Ундағы үҙенсәлекте өндәрҙе әйтеү өсөн бөтөнләй башҡаса һулыш алырға кәрәк. Башҡортостанда йәшәүсе урыҫтар, ыныңды ярат" тип әйтелһә лә, был тойғо бармы? Хатта был йүнәлештәге тәрбиә лә юҡ беҙҙә.

Төрлө диндәр төрлө интеграл яландарға ҡарай. Шуға күрә, 6-сы интеграл яланда йәшәүсе башҡорттар Ислам динен шатланып ҡабул иткән, сөнки Ислам дине үҙе лә 6-сы яланда барлыҡҡа килгән. Хәҙер лозунгылар заманы үтте, кешеләрҙең фекерләүен дөрөҫ юлға сығарыу мөһим бөгөн. Кешеләр киңлекте тере итеп тойорға тейеш. Был тәңгәлдә ҡурай тәүге аҙым булыуы мотлаҡ. Башҡорт балалары ҡурайҙа уйнап өйрәнергә бура. Мин, ғөмүмән, эзотерикаға ҡаршы. Нимә хаҡында һөйләгәнен аңламаған кеше генә эзотерик. Эзотерика кешеләрҙең наҙанлығы, көсһөҙлөгө арҡаһында барлыҡҡа килә.

Әлеге ваҡытта мине ДНК буйынса Нобель премияһына тәҡдим итергә әҙерләйҙәр. Тәҡдим итеү өсөн хатта аҡса ла бүлделәр. Әммә мин быны Америка аша атҡарырға теләмәйем һәм процесты туҡтаттым. Сөнки улар миңә лаборатория тәҡдим итәләр һәм мин унда даими рәүештә эшләргә тейешмен. Бәлки миңә Башҡортостан ерлегендә эшмәкәрлек итергә кәрәктер, сөнки, күреүебеҙсә, Рәсәйҙең, шулай уҡ бөтөн донъяның киләсәге, именлеге фәҡәт Башҡортостан менән бәйле. Әгәр ҙә лаборатория булһа, мин проблеманы молекуляр кимәлдә аңлата алыр инем.

***Икенсе бер мөһим мәсьәлә: ниндәйҙер телде файҙаланыр өсөн ул телдә фекер йөрөтөргә өйрәнергә кәрәк. Әгәр ҙә башҡорт кешеһе урыҫса фекер йөрөтөп, башҡортса һөйләшһә, был башҡорт теле түгел. Башҡорт - ул этнос ҡына түгел, ул нур бөркөүсе кеше, сифат. Башҡорт кешеһе артынан нур эйәрә. Шуға күрә лә Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем башҡорт. Кемдер быны аңламай һәм танымай икән, быының өсөн асыуланырға ярамай. Сөнки асыу тойғоһо аңламағандарҙы, киреһенсә, тоҡандыра.***

рәүешле сағылыш ҡына таба. Ни өсөн тигәндә, ДНК яланының Башҡортостан өҫтөндәге өлөшө зарарланғанға күрә, циркуляция эшләмәй.

Һәр бер этностың юғары аң донъяһына сыға торған киңлектәге юлы була. Мәҫәлән, фарсылар унда Арҡайым аша сыҡҡан. Уларҙың вариҫтары - башҡорттар. Суфыйсылыҡ ағымын да башҡорттар барлыҡҡа килтергән.

Башҡортостанда тыуған бала энергетик планда үҙенә файл ала. Һәр кешегә тыуған сағында ике: атай һәм әсәй булыу функцияһы бирелә. Өсөнсө функция рухиәт үҫешен тәшкил итә. Әгәр ҙә өсөнсө функция үҫтерелмәһә, мәҫәлән, башҡорт теленең ҡанундары буйынса һөйләшә. Быға мин таң ҡалдым. Сөнки урыҫтар башҡорттоң һулыш алыуын тәбиғи рәүештә үҙҙәренә ҡабул иткән. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорттоң һулыш алыуына көйләнгән атмосфералағы тирбәлеш урыҫтарға ла күскән. Улар ошо ерҙә йәшәгәс, бынан бер нисек тә азат була алмай. Икенсе бер мөһим мәсьәлә: ниндәйҙер телде файҙаланыр өсөн ул телдә фекер йөрөтөргә өйрәнергә кәрәк. Әгәр ҙә башҡорт кешеһе урыҫса фекер йөрөтөп, башҡортса һөйләшһә, был башҡорт теле түгел.

Башҡорт - ул этнос ҡына түгел, ул нур бөркөүсе кеше, сирыслы. Әлбиттә, барыһы ла ҡурайсы булып китмәҫ, әммә һәр бер башҡорт балаһы ҡурайҙы аңларға, яратырға тейеш.

Мин оҙаҡ ваҡыт суфыйсылыҡты өйрәндем. Суфыйсылыҡ - ул йәмғиәттең идеаль йәшәү рәүеше. Суфый киңлектә үҫешеп кенә ҡалмай, унын менән аралашыуҙан үҙенә кинәнес ала. Быының өсөн ҙур рухи көс кәрәк. Ул рухи көс бер ниндәй ҙә һүҙ әйтмәйенсә, нимәнелер башҡаларға еткерә алыу ҡөҙрәте.

Икенсенән, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре башҡорттоң йола-традицияларын, мәҙәниәтен һәм сәнғәтен, телен, киңлек менән

**ШУЛАЙ ИТЕП:**

**Кемгә нисектер, мин иһә Нуретдин олатай Игебаевтың, Светлана Марченконың һәм Олег Чернэның дәлилдәренән һуң уларҙа, асылда, бер үк нәмә хаҡында һүҙ барғанлығын аңланым. Һығымтаны һәр кем үҙе яһаһын, тием. Шулай ҙа Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Станислав Говорухиндың "Рәсәй" каналында йәш таланттар конкурсында Ләйсән Золотарева хаҡында әйткән һүҙҙәрен тағы бер тапҡыр иҫкә алғы килә: "Шул тиклем ярһыулыҡ был ҡыҙҙа, шул тиклем энергия - ул хатта хәрби ядро зарядына етер ине..." Әлбиттә, халыҡ артисы был һүҙҙәрҙе уйнап әйтте, әммә сәпкә тейҙе...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(2017 йылдың 49-сы һанында баҫылды).**

✓ ***Фронттан күңелле хәбәрҙәр килә башланы. Сталинградта таш ҡапсыҡҡа эләккән Паулюс ғәскәренә ярҙамға ебәрелгән генерал-фельдмаршал Менштейн башкиҫәрҙәрен совет һалдаты теҙ сүктерҙе.***



# ЕҢЕҮ ҠАНАТТАРЫ

**Фәрзәнә АКБУЛАТОВА**

*Башҡортостандан Советтар Союзы Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булған берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ* ***Мәғүбә Сыртлановаға*** *арнала.*



Аэродромға ҡайтҡас, Мәғүбә үҙҙәре әрйәләр ырғытҡан окоптарҙа йөрөй алмаған яралылар ғына тороп ҡалғанын белде. Улар, хәлдәренән килгәнсә, оборона тоталар, ҡоралдары етешмәй икән. Ә ҡыҙҙарға буш әрйәләр ташларға бойоралар. Тауыш эффекты, имеш...

- Һуғышып үлергә мөмкинлек бирәйек! - Оля Санфирова командирға шулай тип мөрәжәғәт итте.

- Командование приказын үтәргә!

Яралы һуғышсыларға буш әрйәләр ташлап, уларҙың өмөтөн өҙөргә теләмәгән ҡыҙҙар ауыр хәлдә ҡалды. Ольганың самолетына граната тейгәнен һирәктәр генә күрҙе... Ул тарафҡа икенсегә юл алғанда, Мәғүбәнең штурманы әрйәләрҙе ауҙара алмай хитланды.

- Приказды үтәргә!

Ахыр, штурмандан ыңғай яуап ишетелгәс, Мәғүбә ҡайтыр яҡҡа боролдо. Шул саҡ артта көслө ут астылар. Мәғүбәнең самолеты артынса килгән Оля Санфирова дошман уты эсендә ҡалғайны. Ярҙамға! Штурмандың инәлгән тауышы уға тәүәккәллек бирҙе. Мәғүбә самолетын кире борҙо. Бына прожекторҙар уның самолетына яҡтыртты. Хәҙер зениткалар ата башлаясаҡ. Атһындар. Әүрәһендәр. Иң мөһиме, Ольга Санфирова үҙенең йөгөн ҡамау эсендәге яралыларға бушатып өлгөрһөн! Ут ҡойоно эсендә ҡалыу кемгә еңел булһын инде. Был эҫелек, был яҡтылыҡ, был тетрәнеү - кеше бөтәһенә лә сыҙай. Бары бензин бағына снаряд тейә күрмәһен. Мәғүбә самолетын аҫҡа мәтәлдерҙе. Штурманы түҙмәйенсә ракеталарҙан ата башланы. Буш ракетницаны аҫҡа бәрҙе. Зенитка кинәт атыуҙан туктаны. Ә ергә ни бары алтмыш-етмеш метр ғына ҡалған. Мәғүбә түбәндән әкрен генә осоп ҡайтыу яғына боролдо, тишкеләнеп бөткән самолетын көс-хәл менән ергә төшөрөп ултыртты.

- Бер нәмәһе лә ҡалмаған бит, нисек ҡайтып етә алдығыҙ? - ремонт яһаусылар шаҡ ҡатты.

Осоусы ҡыҙҙар иһә Ольга менән нимә булырын һағайып көтәләр.

- Мин үҙ бурысымды үтәнем, ә һеҙ мине әжәлдән һаҡлап ҡалдығыҙ, Мәғүбә апай, - иҫән-һау ҡайтып төшкән Ольга Мәғүбәне ҡосаҡлап үбеп алды. - Инде мине трибуналға бирһәләр ҙә ҡурҡмайым.

Ләкин бөтәһе лә көтөлмәгәнсә ыңғай хәл ителде. Бершанская командованиенан ҡорал тағып осорға рөхсәт алды.

* * *

Ямғыр быҫҡаҡлап ҡына яуа ла яуа. Осоуҙар, тәбиғи, кисектерелде. Землянкаға ингән Мәғүбәне Раиса Аронова үҙе эргәһенә саҡырҙы.

- Йәрәхәтең һыҙлаймы әллә? Төҫөң ҡасҡан, - тине Мәғүбә.

- Түҙерлек, - Раиса башҡалар ишетмәһен тигәндәй тирә-яғын ҡараштырҙы. - Әҙерәк бар.

Борты эргәһендә генә снаряд шартлап, өс тиҫтәнән ашыу яра алған Раиса портҡа саҡ ҡайтып етә алды. Уны шундуҡ госпиталгә оҙаттылар. Бер аҙ хәл инеү менән, ярһыу йөрәкле ҡыҙ кире эскадрильяға әйләнеп ҡайтты. Оса, шулай ҙа тәндән алынып бөтмәгән ярсыҡтар үҙҙәренең барлығын һиҙҙерә.

- Беҙ бит һинең менән яҡташтар, - Һарытау ҡыҙы йөҙөндәге һыҙланыуҙы йәшереп. - Мин бәләкәйҙән башҡорттарҙы күреп үҫтем. Йышыраҡ базарҙа, әлбиттә. Өлкәндәр алыш-биреш итә торғайнылар. Шуға ла "Башҡортостан", "башҡорттар" тигән саҡта бында беҙҙең ҡыҙҙар аптырап та ҡала, ә минә яҡын исем.

- Советтар Союзы ҙур. Белмәһәләр ҙә ғәжәп түгел.

- "Салауат Юлаев" тураһындағы фильмды ҡарағанығыҙ бармы? - Мәғүбә баш ҡаҡҡас, Раиса икенсе һорауҙы бирҙе. - Ә Салауат Юлаевты уйнаған артисты?

Был юлы ҡыҙ "юк"тип баш сайҡаны:

- Мин тыуған яғымдан бала саҡта уҡ сығып киттем. Бәйләнеш өҙөлгән.

- Ә йәл. Күҙҙәре шундай янып тора! Минең таныштар араһында ла уның шикелле йылмайғандар, ут күҙлеләре бар ине.

Тыуған яҡ тураһында һөйләшеү, әлбиттә, кәйефте күтәрә. Мәғүбә йәнләнде.

- Шундай берәүҙе мин дә хәтерләйем. Бәләкәс малайҙы. Ул мине һыбай сабырға өйрәтте. Хатта бейеклектең нимә икәнен икәнен аңлатты. Осоусы һөнәрен һайлауҙа уның да ярҙамы бар. Ана шул Салауат төйәгенән ине балаҡай. Моғайын, ул бөгөн фашистарҙы туҡмайҙыр.

Раиса уға ауыҙын асып аптырап ҡарап ултырҙы.

- Мәғүбә Хөсәйеновна, һеҙ малай тураһында һөйләйһегеҙ. Ә мин теге актерға ғашиҡ булып йөрөгәйнем. Ысынында, бер егетте лә яратҡаным юҡ бит минең, тик...

Ҡыҙ ҡапыл ҡыҙарҙы.

- Һин хәҙер ғашиҡһың, шулаймы?

Рая күҙәрен селт-селт йомдо. Башы әйелде, унан ялп итеп Мәғүбәгә ҡараны.

- Көлмәйһегеҙме? Минең ул егетте күргәнем юҡ. Ул минең фотомды күргән. Сәләм ебәргән. Күрешергә киләсәк. Ә мин хыялый, уны танымаһам да, ғашиҡ булдым да ҡуйҙым.

Ун туғыҙ йәшлек ҡыҙҙың хистәрен аңламаймы ни Мәғүбә!

- Күрешеү генә түгел, сәстәрегеҙ сәскә бәйләнер. Кем ул?

- Күрше полктан. Леонид.

- Тимәк, ул да осоусы.

- Икебеҙ ҙә осоусылар, - ҡыҙҙың күҙҙәре нурланды.

- Еңеү яулаусы пар ҡанаттар! Шулай булһын!

- Ә һеҙ эс серегеҙҙе асмайһығыҙ, Мәғүбә Хөсәйеновна! Бер тапҡыр ҙа ғашиҡ булманығыҙмы ни?

Мәғүбә һорауҙы ишетмәгәндәй, ишек яғына ҡайырылды.

- Эх, мине саҡыралар! Самолетымды ремонтлап бөткәндәрҙер.

Ә күңелен һағыш менән яҡтылыҡ бергә солғаны. "Әсләм", тип типте йөрәге. Бәләбәйҙә тороп ҡалған мөхәббәте. Тәүгеһе лә, һуңғыһы ла түгел, берҙән-бер мөхәббәте.

Әсләм исеме тел осонда ҡыҙҙың. Әсләм - класташы, унан ике йәшкә оло. Ул саҡта кемде нисә йәштә бирергә теләйҙәр, шул ваҡытта уҡырға бирә торғайнылар. Мәғүбәнең класында ла үҙенән йәшкә күпкә ҙурҙар ҙа уҡынылар. Әсләм иһә - Фәрит ағаһының дуҫы. Шуға ла ул Мәғүбәгә һәр эштә ярҙамсы булырға тырышты. Бергәләп лозунгылар яҙҙылар, әүҙемселәр эшендә, ҡыҙыл өмәләрҙә ҡатнаштылар, клубтарҙа ағартыу эштәре, йәғни уҡыуҙар алып барҙылар. Урта Азияға сығып киткәндән һуң, көрәшергә насип булманы. Ләкин Әсләмдең әйткән һүҙҙәре бөгөнгөләй ҡолаҡта ишетелә: "Мин һине, барыбер, барып алып ҡайтасаҡмын!" Урта Азияға килеүсе лә, алып ҡайтыусы ла булманы, шуға ҡарамаҫтан, һүҙҙәре йөрәкте йылыта.

* * *

Фронттан күңелле хәбәрҙәр килә башланы. Сталинградта таш ҡапсыҡҡа эләккән Паулюс ғәскәренә ярҙамға ебәрелгән генерал-фельдмаршал Менштейн башкиҫәрҙәрен совет һалдаты теҙ сүктерҙе. Ленинград, Воронеж фронттарында йәнлелек тойола, дошман сигенә, ҡалаларға совет ғәскәре инә. Төньяҡ Кавказ фронтында ла беҙҙекеләрҙең ғәскәрен, техникаһын туплау башланды. Шуға бәйле, полкҡа осош заданиеһы арттырғандан-арттырылды ғына. Ә һауа шарттары насар, епшек ҡарҙан боҙланған осҡос тыңламай, еүеш һыуыҡ эскә үтеп инә. Махсус һауа разведкаһы булдырғас ҡына, хәл бер ни тиклем еңеләйә төштө.

- Дошман беҙҙең тактиканы яҡшы өйрәнде, шул сәбәпле, юғалтыуҙар бар, хәҙер беҙгә яңыһын уйларға кәрәк, - тине Бершанская үҙенең осоусы ҡыҙҙарына.

Яңы тактика шунан ғибарәт: объекттарға ике самолет китә, уның береһе прожекторҙарҙы, зенит утын үҙенә ҡабул итә, шул арала икенсеһе ут һыҙығын үтә һалып, бомбаларҙы сәпкә ташлай. Ныҡ хәүефле алым, ләкин әлегә бүтән сара юҡ.

1944 йылдың 9 апрелендә Евгения Руднева һәм Калерия Рыльская Керчь эргәһендәге стратегик объектты бомбаға торорға остолар. Тик әйләнеп ҡайта алманылар... Немец прожекторҙарынан ысҡына алмайынса, зенит утына эләгеп яндылар. Тәүге заданиеһын уңышлы үтергә ярҙам иткән полк штурманы Евгенияға Мәғүбәнең ихтирамы сикһеҙ ине. Күҙ йәштәрен йотоп, ҡыҙҙар өсөн фашистарҙан мотлаҡ үс алырға ант итте.

Евгения менән булған бер һөйләшеү ихтыярҙан тыш иҫкә килеп төштө.

- Мәғүбә Хөсәйеновна, һеҙ беҙҙән күпкә олоһоғоҙ. Мин яратырға ла өлгөрмәнем, фронтҡа юлландым. Һеҙҙең, моғайын, ҡәҙерле кешегеҙ барҙыр. Нишләп бер ҡасан да телгә алмайһығыҙ, беҙгә бит ҡыҙыҡ?

Йондоҙҙар ғына түгел, әкиәттәр, шиғырҙар яратҡан егерме йәшлек хисле ҡыҙҙың был һорауынан Мәғүбә ҡаушап ҡалды.

- Һөйләрмен берәй буш ваҡытта, - тине лә икенсе эштәр менән әүрәне.

"Һөйләрмен буш ваҡытта..." Мөхәббәт тураһында күберәк белергә теләгән, һөйгәненән осраторға өмөтләнгән романтик ҡыҙ, полк штурманы Евгения был донъяла юҡ. Йондоҙҙар араһына осто. Полкташ ҡыҙҙарҙың уға арнаған шиғыры ғына ҡабат-ҡабат күңелдә яңғырай:

*Рассказала ты чудесную сказку,*
*И сама ты на сказку похожа!*
*В нашей жизни простой и суровой*
*Ты как солнечный зайчик весной.*
*Поглядишь, улыбнешься ласково,*
*И глаза засмеются тоже,*
*Словно чистое небо майское,*
*Синей искристой бирюзой!*

Бәләбәйҙәге мәктәптә төрлө саралар үткәрелеп торҙо. Яҡшы уҡыған Мәғүбә, уларҙың һәр береһендә тиерлек, ҡатнашты, уҡытыусыларҙың үҙен яратҡанын белә. Пионер, комсомол эштәре булһынмы, уға таяналар. Шул уҡ ваҡытта, синфи дошмандар менән көрәш ҡырҡыулаша барҙы, яңы тормош дошмандарының аҫтыртын эш алып барыуҙар тураһында йышыраҡ һөйләйҙәр, фашланған буржуаз элементтарҙы атайҙар, туҡтауһыҙ йыйылыштар үткәрелә. Кем ул күренмәгән дошмандар? Нишләп бәхетле Совет илен юҡ итергә тырышалар? Үҫмер балаға былар бик үк аңлашылып бөтмәй. Шул уҡ ваҡытта, ул үҙенең матур ирекле илдә йәшәгәненә, уға файҙа килтерәсәгенә ҡыуана. Быға шик юҡ, Мәғүбә менән мәктәптә юҡҡа ғорурланалармы ни. Уға ғына түгел, Әсләм менән икеһенә яуаплы бурыстарҙы тапшыралар. Лозунгылар менән күпме демонстрацияларға сыҡтылар. "КИМ үҙенең рәтенә бөтөн илдәрҙең иҙелгән йәштәрен саҡыра!" "Дошман үҙенең урынын ирекле рәүештә бирмәһә, уны юҡ итергә!" "Троцкистар-зиновьевтарға йәштәрҙе бутарға юл ҡуймайбыҙ!" Әлеге лозунг иҫкә төшкәс, Мәғүбә ирекһеҙҙән тертләне.

Ә бит уның Фәрит ағаһын тап шул эштә ғәйепләнеләр. Йәнәһе, ул, крәҫтиән йәштәрен бүлгесләр өсөн "урта хәлле йәштәрҙең делегат йыйылышын үткәрергә" тигән саҡырыуҙы хуплаған... Бер төркөм активистар уның Фәрит ағаһына килделәр һәм дошман элементтары менән бәйләнештә ғәйепләп, яңы ғына атаһы һатып алып биргән итеген һалдырып алып сығып киттеләр. Әсләм, бары Әсләм генә Фәрит дуҫын яҡлашты. Һәм уға янанылар:

- Әсләм, һин иҙелгән кластан, онотма. Беҙҙең арала хаиндарға урын юҡ.

Тегеләр күҙҙән юғалғас, Фәрит, Әсләм дуҫына тура ҡарап, шулай тине:

- Һин, ысынлап та, ярлы крәҫтиән балаһы. Әгәр ҙә үҙенә насарлыҡ теләмәһәң, тыйыл. Дуҫлыҡтан баш тарта алаһың.

Әсләм Фәритҡә түгел, ә Мәғүбәнең күҙҙәренә ҡарап:

- Юҡ! - тине.

Шундай яғымлы, шундай ярһыу тауыш. Әле генә, әле генә әйтелгән кеүек...

Һуңғараҡ хәллерәк кешеләрҙең мөлкәтен тартып алыу башланды. Бер йыйылышта: "Хөсәйен байҙы өйөнән ҡыуырға кәрәк", - тигән янау булған. Шул саҡта ғаилә: "Донъялар тынысланғансы ҡырға китеп торайыҡ",- тип ҡарар итте. Иң яҡын туғандары ғына күсенеп китергә йыйынғандарын белделәр, ә ҡайҙа китергә тейешлеген берәүгә лә әйтмәнеләр. Мәғүбә генә серҙе бер кешегә асты. Сыртлановтар өсөн йән бирергә әҙер Әсләмгә. Егеттең әйткән һүҙҙәре йәнә ҡолаҡта сыңланы: "Мин һине табасаҡмын, барыбер барып алып ҡайтасаҡмын!"

**(Дауамы. Башы 25-се һанда).**

*✓ Бер генә белгес тә башҡорт еренең урта быуаттарҙа Евразия халыҡтарын берләштереүҙәге ҙур ролен кире ҡаҡманы. Ниндәйҙер бер ваҡытҡа тиклем был хәҡиҡәт онотолоп ҡына торған.*



ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Евразия далаһында көн иткән төрки, монгол халыҡтарының тарихына бәйле Рәсәйҙә бер ниндәй ҙә ҙур музей юҡ. Ике йыл элек Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейын төҙөү тураһында ҡарар сығарҙы һәм был идея йәмәғәтселектә киң хуплау тапты. Проект кураторы, Башҡортостан Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев әйтеүенсә, яңы туристик объект Алтын Урҙа дәүерендәге Турахан һәм Хөсәйенбәк таш кәшәнәләрен үҙ эсенә аласаҡ. Унда шулай уҡ музей комплексы, башҡорт аты үҙәге, "Күскенсе" спа-үҙәге буласаҡ, Туҡтамыш шишмәһе рәткә килтереләсәк. Быltыр август айында Турахан визит-үҙәген төҙөргә тотондолар. Һалына башлаған яңы музей күсмә цивилизация һәм күскенселәр тормошон яҡтыртыуҙа башланғыс булараҡ сығыш яһай. Бер үк ваҡытта "Самрау" фонды БСТ телеканалы менән берлектә республика Башлығы грантына "Көс урыны" тигән фильм төшөрә башланы. 11 июлдә киң йәмәғәтселек был фильмды ҡарай аласаҡ. Ошо уңайҙан фильм авторы, БСТ каналының баш мөхәррире Гәүһәр БАТТАЛОВАға өс һорау бирҙек.**



# "КӨС УРЫНЫ" ФИЛЬМЫ...

➔ **Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы, фильм төшөрөү идеяһы ҡасан һәм нисек барлыҡҡа килде?**

- Башҡортостанда шундай бер үҙенсәлекле музей төҙөләсәге тураһында уҡығандан һуң тыуҙы был идея. Уның Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейы тип йөрөтөләсәген белгәс, исеме лә, темаһы ла ҡалай ҡатмарлы, тип уйланым. Миңә, журналист һәм тикшеренеүсе булараҡ, был бик ҡыҙыҡ тойолдо, һәм командабыҙ менән ошо темаға тотонорға тейешбеҙ, тип хәл иттек.

Эште бер йыл элек башлап ебәрҙек. Башҡорт ерененң үткән 300 йыллыҡ тарихы бик аҙ өйрәнелгән, әҙәбиәт күп түгел. Нияз Мәжитов менән Әлфиә Солтанованың, Алексей Нечвалода һәм Геннадий Гарустовичтың китаптары, беренсе, икенсе Мәжитов уҡыуҙарында сыҡҡан монографиялар бар. Беренсе башҡорт архитекторы Барый Кәлимуллиндың 1956 йылда сыҡҡан "Башҡортостандың археологик ҡомартҡылары" тигән китабын атарға кәрәк, сөнки ул әлегә тиклем иң ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып ҡала. Евразия музейы - тарихтың, Алтын Урҙа дәүеренең, урта быуаттың башҡорт еренә кире әйләнеп ҡайтыуы бит ул. Ошо дәүерҙе өйрәнеү Евразия күсмә халыҡтар цивилизацияһы музейының тәүге объекты - төҙөлөп ятҡан визит-үҙәктән башланды.

Әгәр ҙә һиңә нимәләр ҡыҙыҡ, ниндәйҙер идея менән янаһың икән, ошо тема тирәһенә башҡа кешеләрҙе лә туплауы бер ҙә ауыр түгел. Фильмды төшөрөүҙә төрлө өлкәлә эшләгән 34 спикер ҡатнашты. Республиканан тыш, беҙ Үзбәкстанда ла, Ҡаҙағстанда ла булдыҡ. Башҡортостанда Европа һәм Азия халыҡтарын берләштереүсе үҙәк буласағын белгәс, архитекторҙар, археологтар, проектлаусылар гәжәпләнделәр ҙә, ҡыуандылар ҙа. Бер генә белгес тә башҡорт ерененң урта быуаттарҙа Евразия халыҡтарын берләштереүҙәге ҙур ролен кире ҡаҡманы. Ниндәйҙер бер ваҡытҡа тиклем был хәҡиҡәт онотолоп ҡына торған. Ләкин Радий Хәбировтың музейға бәйле ҡарары арҡаһында беҙ ҡабаттан үҙебеҙҙең тәү сығанаҡтарҙы тергеҙәбеҙ.

Фильмда күсмә халыҡтарҙың тормошон күрһәтеүҙе төп бурыс итеп алдыҡ. Күп кенә нәфис фильмдарҙа уларҙы арҡыс-торҡос ҡылыс аҫҡан, бысраҡ һәм ҡурҡыныс ҡиәфәтле итеп күрһәтәләр. Күскенселәр - тәбиғәт балалары. Уларға һоҡланмау мөмкин түгел. Улар үҙҙәренең күңел матурлығы менән үҙенә тарта һәм арбай. Миңә Николай Заболоцкийҙың "Рубрук в Монголии" тигән шиғыры бик тә оҡшай.

"Здесь был особой жизни опыт,
Особый дух, особый тон.
Здесь речь была как конский топот,
Как стук мечей, как копий звон... "

Фильмды эшләй башлаған саҡта, бәлки, теманың тәрәнлеген, ҙурлығын бигүк аңлап та еткермәгәнбеҙҙер. Ләкин ул беҙҙе үҙенең эсенә алып инеп китте һәм беҙ унан бер нисек тә айырыла алманыҡ.

➔ **Фильмды төшөргән саҡта үҙегеҙ өсөн ниндәй асыштар яһанығыҙ?**

- Ниндәй ҙур күләмдә эш атҡарылғанын үҙегеҙ ҙә күҙаллайһығыҙҙыр. Бер диссертация яҙырлыҡ хеҙмәт ул. Фильмды төшөрөп бөтөп, монтажлағандан һуң, беҙҙең ғилми консультант, тарихсы Илнур Буләков шулай тине:



- Фильмдың матурлығы беләһегеҙме нимәлә? Бында мин уның ҙурлығы, профессионаллеге тураһында әйтмәйем. Һеҙ ҡатмарлы тарихты ябай тел менән һөйләп бирә алдығыҙ. Шулай еңел итеп күрһәтер өсөн ошо ҡатмарлы теманың сөңгөлдәренә төшөргә, уны бөтөн тәрәнлегендә аңларға кәрәк бит...

Фильм авторына быңдай һүҙҙе ишетеү ҡыуаныс ҡына өҫтәй, әлбиттә. Фильмды төшөргән саҡта баҙап ҡалған мәлдәр ҙә булды. Сөнки унда беҙ әлегәсә әҙ өйрәнелгән темаларға ҡағылдыҡ - башҡорт халҡы Урта Урҙа составына нисек ингән? Алтын Урҙаның Джучи Олоҫо тип йөрөтөлгәнен күптәр белмәйҙер ҙә. Джучи - Сыңғыҙхандың улы. Джучи Олоҫона башҡорттар үҙ иректәре менән ингәнме, әллә улар яулап алынған халыҡмы? Был һорауға әлегә тура яуап бирмәйем, яуабын фильмды ҡарағас, үҙегеҙ белерһегеҙ.

Хөсәйенбәк тураһында мәғлүмәт туплай башлағанда ла һорауҙар тыуҙы. "Хөсәйенбәк - Башҡортостандың беренсе имамы", тиелә интернетта. Беҙгә ислам VIII быуатта үтеп инә башлай, шулай ҙа уның әүҙем осоро Үзбәк хан Исламды дәүләт дине, тип иғлан иткәндән һуң, йәғни X быуатҡа тура килә. Шунда ғына Ислам яңы бейеклеккә күтәрелә. Тап шул саҡта Хөсәйенбәк имам булып китә. Беҙ фильмда үҙбелдеклелек менән булышманыҡ, ә яңғыраған фекерҙәр һәм факттарҙы спикерҙарҙың һығымталары менән нығытырға тырыштыҡ. Әгәр ҙә беҙ фильмда визит-үҙәктең төҙөлөшөн генә күрһәтһәк, ул ҡыҙыҡ булмаҫ һәм әлеге тәрәнлеккә лә эйә булмаҫ ине. Турахан визит-үҙәгенән музейға алып барған һуҡмаҡ ябай ғына һуҡмаҡ түгел - ул боронғолоҡтан бөгөнгөгә һалынған юл, быуаттарҙы тоташтырыусы һуҡмаҡ.



➔ **Фильм төшөрөүҙең үҙенсәлеген - кино ҡараусы күрмәй торған эске тормошон да белге килә. Команда нисек тупланды?**

- Беҙҙең үтенесте ишетеп, фильмда төшкән һәр береһенә рәхмәтлебеҙ. Көрәш федерацияһы президенты Вәкил Ильясов һәм уның командаһы, мәргән уҡсы Юлай Ғәлиуллин, Ҡырмыҫҡалы районында беҙгә махсус тирмә ҡорған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ... Фильм төшөрөр өсөн электр бағаналары, машиналар, ауылдар булмаған урындар таптыҡ. Ағас тусҭаҡтар эшләттек. Кейем төрлөлөгө кәрәк ине, сөнки был Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле сығышы түгел бит. Беҙҙең өсөн райондарҙа махсус кейем тектеләр. Әгәр ҙә ошондай бер-береңде аңлау, теләктәшлек булмаһа, фильм да уңышлы килеп сыҡмаҫ ине. Ҡырмыҫҡалы, Ғафури, Бөрйән, Ейәнсура, Архангел райондары етәкселәренә һәм халҡына ҙур рәхмәт.

Тарихи сәхнәләрҙә тәжрибәле олпат актерҙар ҡатнашты - Хөрмәтулла Үтәшев, Рәсул Ҡарабулатов, Азамат Ғафаров һәм башҡалар. Актерҙарҙы һайлап алыу ҙа еңел булманы.

Бер-береңде аңлау һәм берҙәмлек булмаһа, быңдай фильмды төшөрөү ҙә мөмкин түгел. "Көс урыны" - ул коллектив хеҙмәт емеше, яҡынса илледән кеше ҡатнашты. Режиссерҙар Әлфиә Арыҫланова һәм Ләйсән Рамаҙанова, операторҙар Азамат Даянов, Ринат Ҡашапов, Илшат Дәүләтбирҙин, Урал Ғатауллин ең һыҙғанып эшләнеләр. Айрат Өмөтбаевтың юғары сифатлы компьютер графикаһы тураһында ла әйтергә кәрәк.

Мәҙәни мираҫ объекттары буйынса фәнни-етештереү үҙәге археологы Дим Ғиззәтов милли кейемдәр буйынса беҙҙең кәңәшсе булды. Турахандың кейемен тегер алдынан уға заказ биргәйнек, һәм ул беҙгә 200 битлек ғилми хеҙмәт яҙҙы. Талантлы рәссам Даян Вәлиуллиндың ярҙамы ҙур булды. Кейемдәрҙе Саимә Хәсәнова ательеһында тектерҙек.

Бигерәк тә нимәһе менән оҡшай командабыҙ? Бер-береһен хөрмәт итеүҙәре менән. Беҙ эшкә шул тиклем мөкиббән киткәнбеҙ, хатта бәхәсләшкән саҡта ла бөтәбеҙ ҙә эштең тик яҡшы килеп сығыуы менән генә янабыҙ. Ошо ҙур команда, барыбыҙ бер булып, фильмдың сыҡҡанын түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. "Көс урыны" - беҙҙең дөйөм балабыҙ, шуға ла ул һәр беребеҙгә ҡәҙерле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**6 июлдә Турахан визит-үҙәге рәсми асыласаҡ. "Көс урыны" рәсми асыу мәлендә күрһәтеләсәк. Әле һаман фильмды камиллаштырыу өҫтөндәбеҙ, үҙгәрештәр, өҫтәмәләр булыр. БСТ телеканалында премьераһы 11 июлдә киске һигеҙҙә буласаҡ. Фильмдың дауамы ла булыр тип өмөтләнәбеҙ.**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘҮ...

## кәйефте күтәрә

■ Көслө стресс кисергәндән һуң, кеше шунда уҡ ятып йоҡлаһа, ул уны еңелерәк кисерәсәк. АҠШ-тың Массачусетс университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай ваҡытта иң яҡшы һәм тәьҫирле дарыу булып йоҡо тора. Әгәр ҙә кеше юлда берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булған йәки үҙе аварияға эләккән икән, йоҡлап алғандан һуң уның эмоциональ торошо күпкә яҡшырасаҡ.

■ Нью-Йоркта урынлашҡан медицина үҙәктәренең береһендә кеше өсөн иң зыянлы һөнәрҙе асыҡлағандар. Үҙенең эш сәғәттәрен калориялы һәм туҡлыҡты аҙыҡтар араһында үткәреүсе ашнаҡсы һөнәре сәләмәтлеккә иң насар тәьҫир итеүсе һөнәр тип табылған. Бигерәк тә ҙур рестарандарҙа эшләүсе ашнаҡсыларға еңелдән тура килмәй, ябай кеше көнөнә 2 меңдән 3 мең калорийға тиклем ҡулланһа, улар 4 мең калорий "ашай".

■ Башҡалар өсөн изге эштәр эшләп, беҙ үҙебеҙ өсөн ыңғай тойғолар алабыҙ, кәйефебеҙ, үҙ-үҙебеҙгә ҡуйған баһабыҙ күтәрелә. Хәҙер ғалимдар изгелек эшләүҙең депрессия кеүек аффектив хәлдәрҙе дауалауҙа терапевтик баһаһы барлығын иҫбатлаған. Бындай ауырыуҙарҙы дауалау менән шөғөлләнгән белгестәр әйтеүенсә, изге эштәр эшләү иң һөҙөмтәле һәм осһоҙло дарыу һанала. Кемгәлер нимәләлер ярҙам итеү һөҙөмтәһендә кеше 10 минут самаһы юғары кәйефтә йөрөй. Хроник депрессиялы кешенең хәлен яҡшыртыу өсөн ошо ла етә, ти табиптар.

■ Арҡаға ятып йоҡлау төнгө ял өсөн иң идеаль вариант һанала. Бындай поза арҡа һәм муйында ауыртыу барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, йыйырсыҡтар булдырмай. Шулай уҡ ҡабырғала йоҡлау яҡшы. Ауырлы ҡатындарға табиптар һул ҡабырғаларында йоҡларға кәңәш итә. Иң зарарлы поза - эскә ятып йоҡлау. Йыйырсыҡтарҙан тыш, муйын һәм арҡа йәрәхәте алыу ҡурҡынысы бар, бынан тыш, арҡа һәм быуындар бөтөнләй ял итмәй.

■ British Medical Journal журналы, гәҙәттә, фармацевтик компаниялар матди килем табыу өсөн "уйлап тапҡан" ауырыуҙарҙың һаны 200-ҙән ашып киткән, тип билдәләй. Уларҙың күбеһе организмын йәш итеп һаҡлап ҡалырға теләүсе хәлле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Иң күп "ауырыуҙар" Америкала уйлап табыла. Табиптар тормошо тураһындағы популяр сериалдарҙан күренеүенсә, әгәр ҙә мәктәптә бала үҙен әүҙем тота, күп йүгерә һәм уҡырға теләмәй икән, мәктәп психологы уны хроник психик ауырыуҙар исемлегенә яҙып ҡуйыуы ла ихтимал. Бындай балаларға мотлаҡ транквилизаторҙар һәм стимуллаштереүсе дарыуҙар тәғәйенләнә. Донъя алғанда, Америкала йәшәүсе һәм "әүҙем тормош" алып барыусы һәр икенсе кеше антидепрессант курсы үтә. Ә Рәсәйҙә был ысул менән башлыса косметик компаниялар аҡса эшләй. Шулай уҡ остеохондроз кеүек ауырыуҙарҙы дауалаусы препараттар һатып алыу өсөн Рәсәй ярты йыл эсендә 12 миллион һумдан ашыу аҡса тотона. Реклама маҡтаған антибактериаль һабын менән салфеткалар ҙа ысынбарлыҡта беҙҙең ҡулдарҙағы бактерияларҙың һанын кәметмәй.

ҺӨНӘРМӘНДӘР МӘКТӘБЕ

# БАШҠОРТ АҪАЛЫ БАЛАҪЫ

**Быйыл, 2024 йылда, Әлшәйҙә "Быуаттарҙы ялғар аҫыл еп" - "Веков связующая нить" республика фестивале етенсе мәртәбә үтте. Фестиваль Бөтә Рәсәй мөһим милли-мәҙәни проекттарының "Рәсәй - этник ирәүел" - "Россия - этнический комфорт" бәйгеһендә "Милли йолаларҙы һаҡлау-үҫтереү өсөн абруйлы диплом"ына лайыҡ булды.**

## Кемдәр улар, башлап йөрөүселәр?

Башҡорт аҫалы балаҫын данлаған йыйынды халыҡта Әлшәй фестивале, тиҙәр. Сөнки уны Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә Әлшәй муниципаль районы хакимиәте ойоштора. Төбәктә һуғарған Дим, Ҡыҙыл, Дымлы Ҡыҙыл, Төлән, Таҡйылға, Өршәк йылғаһы буйҙары - әүәләүәлдән аҫалы балаҫ һуҡҡан мең ырыуы башҡорттарының төйәге. Ошо тарихи аң һәм ғорурлыҡ менән фестиваль сиктәре йылдан-йыл киңәйтелә: күрше Миәкә, Дәүләкән, Бишбүләк, Йәрмәкәй, Ғафури, Архангел, Баймаҡ, Бөрйән, Өфө балаҫсылары, хатта Ишембай, Стәрлетамаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Бөрө, Күгәрсен оҫталары фестивалдә йөҙөп йөрөп ҡатнаша, сөнки аҫалапбарсалап һуғыу серҙәре күптәрҙе ҡыҙыҡһындыра. Быуындан-быуынға тапшырылып, ауылдан-ауылға таралып, балаҫтан-балаҫҡа күсерелеп, уникаль башҡорт аҫалары, биҙәктәре, барсалары милли хазина кимәленә күтәрелгән. Йыл һайын яҙ башында ошо әкиәти тылсымлы һөнәр эйәләрен күреү, боронғо һәм бөгөнгө аҫалар байрамында ҡатнашыу бик тә мәртәбәле.

Был фестивалгә юл асыусы, фатиха биреүсе Әлшәй кешеләре үҙҙәре ҡасандыр аҫалы балаҫтар һуғып үҫкән. Район хакимиәте башлығы Дамир Мостафин менән уның урынбаҫары Закуан Әхмәтов (мәрхүм) әйтеүенсә, "аҫалы балаҫ нурына ҡойоноп, матурлығына ғашиҡ булып, матди файҙаһын тойоп үҫкән яҡташтары ысын мәғәнәһендә бай этник байрамға, ярҙамға һәм данлауға лайыҡ". Был идеяны Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһын оҙаҡ йылдар етәкләгән Кәримә Кайдалова хуплай һәм фестиваль эшен яйға һалыуға һәр яҡлап булышлыҡ күрһәтә. Баһамандар төркөмөнә милли һөнәрмәнлек белгестәре саҡырыла. Бөрө ҡалаһының Тарихи музейында "Ебәк юлы" туҡыу-һуғыу үҙәге етәксеһе, ғалимә-оҫтаз Рәзилә Ғарифуллина, Дәүләкән яғы Ҡоръятмаҫ ауылынан аҫалы балаҫ һуғыу ветераны, легендар оҫта Нәжиә Әхмәтвәлиева, Архангел районынан "Мозаика" халыҡ туҡыу-һуғыу клубы етәксеһе Фәнисә Гольцова бар, уның һуғыу-туҡыу эше буйынса халыҡ клубы асырлыҡ дәрттарманы һәм республика семинарҙары үткәрерлек төплө тәжрибәһе әллә нисә кешегә етерлек. Миәкә районы Елдәр ауылынан Гүзәл Вәлитова балаҫ аҫалау буйынса махсус юғары белем алған, ошо һөнәрҙе камиллаштырыуҙа көс түккән һәм йәштәргә өйрәткән, үҙ яғында "Башҡорт аҫалары" гәмәли мәктәбе асҡан оҫта. Вәлитованың уҡыусылары һуҡҡан башҡорт аҫаһы өлгөләре 2010 йылда уҡ Бөтә Рәсәй халыҡ сәнғәте конкурстарында гран-при яуланы. Республика халыҡ ижады үҙәге белгесе Миләүшә Абайҙуллина Әлшәй фестивалендә даими ҡатнашып, сифатлы һәм заманса эштәре өсөн дипломға лайыҡ булды. Һәм һуңғы йылдарҙа бөтә мәҙәни сәләләрҙың уртаһында ҡайнаған билдәле ҡул эше оҫтаһы Рәйлә Алламоратова ла бөтә Башҡортостанды гиҙеп йөрөп балаҫ һуғыусыларға ярҙам итә. Рәйлә Фәрит ҡыҙының алтын ҡуллы тормош иптәше портатив - өҫтәлгә ҡуймалы һуғыу ҡоралмалы яһай.

Әйткәндәй, аҫалы балаҫтар һуғыусы ҡыҙ-ҡырҡындың уңышлы эшләүенең сере - үҙенең тормош юлдашында, ижади эшкә ынтылған егәрле ҡатындың хыялын киң күңелле һәм булдыҡлы ир-егеттәр әүҙем тормошҡа ашыра. Башҡортостанда балаҫ һуғыу урындары һирәгә тотонған балта оҫталары һәр кемдең тел осонда. Хәйбуллала Вәзәм ауылынан Риф менән Азамат Суриндар, Архангелдә Орловканан Николай Гольцов, Ғафуриҙа Сәйетбабанан Юнир Ишбирҙин (мәрхүм), Дәүләкәндә Ҡоръятмаҫтан Руслан Әминов, шулай уҡ Бөрөлә, Әлшәйҙә, Стәрлетамаҡта өр-яңы туҡыу-һуғыу станок-урыны яһауҫыны табып була бөгөн.

Әлшәй яғында аҫалы балаҫ һәр йортта бар, уны һуғыусылар йәшеҡарты, ҡыҙы-улы һаман да был кәсеп мәнеһен-тәртибен яҡшы белә. Бала саҡтан күңелгә яҡын һәм йәнгә ял, тамаҡҡа аш, өҫкә кейем биргән файҙалы халыҡсан кәсепкә хөрмәтиғтибар кәмемәй. Район башлығы Дамир Мостафин, уның урынбаҫары Айҙар Солтанғолов, мәҙәниәт идараһы етәксеһе Мирҡасим Әкимбәтов, уның ярҙамсылары методистар Н. Шәрипова, Т. Зарипова, Г. Ғиззәтуллина, З.Мөхәмәтйәнова, А.Сәләхова һәм башҡалар арымайталмай төбәктә һәм республикала боронғо халыҡ кәсебен тергеҙеүгә, тарихын өйрәнеүгә, үҙенсәлектәрен һәм киләсәккә үҫешен хәстәрләүгә тотонған.

## Тарихтан...

2010 йылда тәүбашлап аҫалы балаҫ күргәҙмәһе ярты Башҡортостан оҫталарын йыйҙы, Кәлимуллина Тәслимә Әбүлғата ҡыҙы (Әлшәй) алға сыҡты.

2011 йылда фестиваль барышында Балаҫ йәрминкәһе ойошторолдо һәм район Балалар ижады йортонда түңәрәк эше өсөн яңы балаҫ һуғыу ҡоролмалары һатып алынды.

2012 йылда профессиональ оҫталар күргәҙмәһендә Нәжиә Фазлый ҡыҙы Әхмәтвәлиеваға (Дәүләкән) тиңләшеүсе булманы.

2014 йылда Әлшәй фестивале боронғо оҫталарҙың балаҫтарын йыйып, хөрмәт һәм хәтер тантанаһы үткәрҙе.

2016 йылда Кәлимуллина Амира Хәйҙәр ҡыҙы (Әлшәй) еңеүсе булды.

2018 йылда Гүзәл Хәниф ҡыҙы Вәлитова (Миәкә) иң-иң оҫта баһаһын алды.



Боронғо аҫа



Йондоҙ аҫа

2019 йылда Әлшәйҙәрҙең аҫалар конкурсы Халыҡ-ара "Содружество" фестиваленә ҡатар үткәрелде, ике кешегә гран-при дипломы тапшырылды.

2021 йылда Зәкирә Хәлиулла ҡыҙы Воронцова (Әлшәй) төп еңеүсе исеменә лайыҡ булды.

2023 йылда Зөлфиә Хәлиулла ҡыҙы Бикбулатова (Әлшәй) гран-при эйәһе булды.

2024 йылда Өмөтбаева Гөлсәсәк Рауил ҡыҙы (Әбйәлил) менән Ҡаҙаҡбаева Таңһылыу Рауил ҡыҙы (Бөрйән) замансa оҫталыҡ менән һуғылған аҫалы балаҫтары менән иң алға сыҡты. Улар бер туғандар булып сыҡты. Шулай ҙа була: оҫталыҡ - ғаилә бүләге.

"Быуаттарҙы ялғар аҫыл еп" аҫалы балаҫ фестивале һөнәрмәндәргә Лауреат дипломдары, Маҡтау ҡағыҙҙары бирә, "Алтын ҡул", "Маһир һөнәрмән" исемдәре менән хуплап тора. 2023 йылда баһамандар "Иң шәп балаҫсы" тигән "үҙешмәкәр титул" уйлап тапты, был баһа менән күп йылдар буйы балаҫ һуғыу эшен тергеҙеүгә ихлас көс һалған, халыҡ араһында һәм йәштәр менән эш алып барған айырыуса ынтымат һәм булдыҡлы оҫталар билдәләнде. Кем белә, яҡын киләсәктә уларға "Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ һөнәрмәне" тигән дәрәжәле исем бирелеүе бик ихтимал. Шулай итеп, фестивалдә бер тауыштан танылған иң шәп балаҫсылар: Гүзәл Вәлитова (Миәкә), Асия Лотфрахманова (Әлшәй), Фәһимә Хәлилова (Архангел), Рәйлә Алламоратова (Өфө районы), Рәйлә Ғәбдрәхимова (Әлшәй).

### Етенсе фестиваль күргәҙмәһендә

Әлшәй уртаһында ике көн буйы гөрләп торған социаль-мәҙәни Үҙәктә аллы-гөллө аҫалы аҫыл балаҫтар балҡып торҙо. Фестивалдең йолаһына әйләнгән оҫталыҡ дәрестәре, лекциялар, түңәрәк өҫтәл артында фекер алышыу - бөтәһе лә һәр кем өсөн фәһемле, таныҡ. Алдағы конкурстарҙа еңеүсе тип табылған оҫталарҙың эштәрен генә түгел, үҙҙәрен имен-һау күрергә, уңышлы эш серен белешергә, яңылыҡтарын тыңларға ярата улар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һөнәрмәнлеге тормошто йәмләүҙә һәм аяҡҡа баҫтырыуҙа быуаттар буйы башҡорт аҫаларының уникаль биҙәктәрен, бер ҡайҙа ла ҡабатланмаҫ биҙәктәрен барлыҡҡа килтерә. Әлшәй балаҫсылары көньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда айырыуса киң таралған эште алға сығарҙы, халыҡ сәнғәте дәрәжәһенә күтәрелгән һөнәри оҫталыҡҡа киләсәккә юл асты.

Миәкә районы Боғҙан ауылынан килгән Зөлхизә Әмированың, Тамъяндан Зәлифә Янышеваның (1956) балаҫында быгаса бик һирәк осраған "кандала" йәки "йәйен ауыҙ" тигән боронғо аҫа килеп сыҡты. Уны күптәр фотоға төшөрөп, бик ҡатмарлы икәнен күреп, уғата ҡыҙыҡһынып киттеләр.

Миәкәнән Миңнур Ғатауллина (1969) балаҫында ҡатмарлы айсыҡ, өсмөйөш биҙәк аҫа бик ҡыҙыҡлы яңы композиция хасил иткән, уҡытыусыһы Гүзәл Вәлитованың ярҙамы һиҙелеп тора.

Архангелдән Көмәрле ауылынан килгән Фәнүзә Иштуғановaның (1953) эше ауылдашы Фәриҙә Яҡуповaның (1932) һуҡҡан аҫалы балаҫынан бик уңышлы күсерелгән. Ысынлап та, оҫталар талабы электән шулай ҡәтғи: "Аҫалар тулы ояһы менән һәм дөрөҫ күсерелергә тейеш. Боҙолған аҫа - емерелгән яҙмыш. Аҫаны үҙгәртеү - гонаһ."

Әлшәйҙең Һарыш ауылынан Шәүрә Йосопова (1948) алып килгән балаҫ 1980 йылда һуғылған, уның буйы-диагональ ҡуйылышы теүәл һәм асыҡ, һирәк осрай торған ҡатмарлы сулпы аҫа юғары баһаланды. Әлшәй оҫтаһы Суфия Шәнгәрәева (1937) балаҫында бик күркәм урата-рамка һуғылған, ҡара ерлектәге сағыу батмус аҫалар күҙ яуын алырлыҡ ине. Әлшәй оҫтаһы Рәзилә Шафиҡованың (1957) балаҫы халыҡсан традицияларға тоғролоҡ өлгөһө булараҡ "Фестиваль һөйөнөсө" тигән маҡтауҙарға лайыҡ булды. Зилә Шайморатова (1961) тәҡдим иткән балаҫта бик ыҡсым һуғылған айсыҡ, бетеү аҫалары хәтерҙә ҡалды. Тәслимә Кәлимуллина үҙенең яңы балаҫын төп халыҡсан рухта бик сифатлы итеп һуҡҡан, уның кеүек оҫталыҡ бөтә күргәҙмәлә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Асия Лотфрахманова (1937) - билдәле оҫта, уның эштәре һәр саҡ күҙгә бәрелә, быйыл да "Фестиваль аҫаһы эталоны" тигән яҡшы баһалар уға арналды. Наил Ғизетдинов (1951) үҙенең әсәһе һуҡҡан аҫалы балаҫты күргәҙмәгә ҡуйған, әсәһе Мәзинә Хәбирова (1929-2020) ятраҡан эшен балаларына ҡалдырған. Самауыр тояғы аҫаһы төшкән тәбиғи йөндән һуғылған тығыҙ, биш килограмлы был бик затлы монаят ысын мәғәнәһендә "Фестиваль ҡомартҡыһы". Әбйәлилдән килгән Баймаҡ ҡыҙы Гөлсәсәк Өмөтбаеваның (1975) эштәрсә дөрт һәм оран ташлап торған сағыу эше - "Аҫалар йондоҙлоғо" тиергә мөмкин. Йондоҙ аҫалар әллә нисә төҫтә нурланып, калейдоскоп кеүек тирә-йүнгә теремек шат ҡарай. Гөлсәсәк Өфөләге "Агиҙел" берекмәһендә һуғылған профессиональ рәссамдар ижад иткән башҡорт аҫалы балаҫын саф халыҡсан стилдә яңынан "тыуҙырған". Заманса төҫтәр һәр кем күңеленә хуш килерҙәй. Уның эшен күреү менән "Фестиваль асылы" тигән өмөт тоҡана. Архангелдән Фәһимә Хәлилова (1952) һуҡҡан балаҫ ғәҙәттән тыш йоҡа, плед рәүешендә, әммә аҫалап һуғылышы бик таҙа, ентекле эшләнгән, уны иң талапсан күргәҙмәләргә ҡуйырлыҡ. Хәйбулланан Тәнзилә Ҡускилдина (1957) килтергән баҙыян аҫалы балаҫ баҙыҡ төҫтәргә буялған һарыҡ йөнөнән тығыҙ итеп һуғылған, сифатлы эшенә ҡарап, оҫтаға "Фестивалдең алтын ҡулы" баһаһын бирге килә. Дәүләкәндән Мөнирә Абайҙуллина (1966) үҙенең һуҙмаһында шулай уҡ яҡшы сифатлы итеп аҫалау өлгөһө күрһәтте.

Таңһылыу Ҡарағолова (1975) Бөрйәндән килгән (үҙе Баймаҡ яғынан), күргәҙмәгә ҡуйған эшендә бик йыйнаҡ һәм ышаныслы итеп һуғылған боронғо йондоҙ аҫалар яңырып-балҡып тора, оҫтаның бик талантлы икәнен һөйөнсөләй. Күнелгә килгән беренсе һүҙ - бына бит "Фестиваль хыялы".

Әлшәй аҫалы балаҫтар фестивалендә күнелде йылытҡан иң матур күренеш - балаҫ һуҡҡан ғаиләләр булды. Бәхеткә күрә, улар бик күп, береһенән-береһе егәрле һәм татыу оялар. Етенсе фестивалгә Бишбүләк районы Аҙнай ауылынан килгән Кирәевтар ғаиләһе айырым күргәҙмә ҡорғайны. Кирәев Сәйфелмөлөк атлы уҙамандың биш ҡыҙы була, инәйҙәренә эйәреп, барыһы ла аҫалы балаҫ һуға. Миңлегөл, Миңнеямал, Рәфиә, Ралия, Факия, Лилиә менән Рәфиә Ҡәҙер ҡыҙҙары Миһрановалар - шул уҡ ғаиләнән, улар бергә унлап балаҫ элде. Традицион аҫалар араһында әтәс, ҡусҡар биҙәктәре лә пәйҙә булған. Балаҫ оҫталары ындай яңы күренешкә иғтибар итте. Һуғыусының электән эш белгән сымыры ҡуллы икәне һәр балаҫта күренеп тора ине.

**Сәрүәр СУРИНА.**
**(Дауамы бар).**



Айсыҡ аҫа



Кәкерсәк аҫа

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

**Ҡәҙерле дуҫтар! Һеҙҙең алдығыҙҙа үткән быуаттың күренекле ғалимдарының береһе, академик Дмитрий Сергеевич Лихачевтың китабы. "Изгелек һәм гүзәллек тураһында хаттар" айырым кешегә түгел, ә барлыҡ уҡыусыларға яҙылған. Иң тәү сиратта тормошҡа өйрәнергә, уның ҡатмарлы юлдарын үтергә тейешле йәштәргә.**

Хаттарҙың авторы Дмитрий Сергеевич Лихачев - исеме бар ҡитғаларҙа билдәле, ватан һәм сит ил әҙәбиәтенең күренекле белгесе, бик күп сит ил академияларының почетлы ағзаһы итеп һайланған, башҡа ҙур ғилми учреждениеларҙың почетлы исемдәрен йөрөтөүсе кеше булыуы был китапты айырыуса баһалы итә. Сөнки тик абруйлы кеше генә кәңәштәр бирә ала. Югиһә, кәңәштәргә ҡолаҡ һалыусылар булмаясаҡ. Ә был китапты уҡығандан алған кәңәштәр тормоштоң бөтә тиерлек яҡтарына ҡағыла.

Был - аҡыл йыйынтығы, педагогик такты һәм уҡыусылары менән һөйләшә белеү оҫталығы иң мөһим талантларының береһе булған изгелекле Уҡытыусы телмәре.

Был китап "Балалар әҙәбиәте" нәшриәте тарафынан тәүге тапҡыр 1985 йылда нәшер ителә һәм күп тә үтмәй, һирәк осрай торған китапҡа әүерелә. Уны төрлө илдәрҙә, төрлө телдәргә тәржемә иткәндәр.

Японияла нәшер ителгән китабына инеш һүҙҙә Д.С. Лихачев үҙе бына нимә тип яҙа: "Яҡшылыҡ һәм матурлыҡ бөтә халыҡтар өсөн дә уртаҡ булыуына тәрән инанам. Уртаҡ - ике мәғәнәлә: дөрөҫлөк һәм матурлыҡ - мәңгелек юлдаштар, улар үҙ-ара берҙәм һәм бөтә халыҡтар өсөн дә бер төрлө.

Ялған - бөтәһе өсөн дә яман. Асыҡ күңеллелек һәм дөрөҫлөк, намыҫлылыҡ һәм эскерһеҙлек һәр ваҡыт яҡшылыҡ.

Балалар өсөн тәғәйенләнгән "Изгелек һәм гүзәллек тураһында хаттар" китабымда мин иң ябай дәлилдәр арҙамында яҡшылыҡ юлынан барыу кеше өсөн иң ҡулай һәм бер бөртөк юл булыуын аңлатырға тырышам. Ул һыналған, ул дөрөҫ, ул файҙалы - айырым кешегә лә һәм дөйөм йәмғиәткә лә.

Хаттарымда мин изгелек, яҡшылыҡ нимә икәнен һәм ни өсөн изгелекле кеше эстән дә матур, үҙ-үҙе, йәмғиәт һәм тәбиғәт менән татыу йәшәүен аңлатмайым. Мин кеше булмышынан сығып, аныҡ миҫалдарға ынтылам.

Мин изгелекте һәм уға яҡын гүзәллек төшөнсәһен ниндәй ҙә булһа берәй донъяға ҡарашҡа яраҡлаштырмайым. Мин килтергән миҫалдар идеологик түгел, сөнки уларҙы балалар үҙен ниндәй ҙә булһа донъяға ҡараштарға ярашлы буйһондора башлағанға тиклем аңлатҡым килә.

Балалар йолаларҙы бик ярата, йорто, ғаиләһе һәм шулай уҡ ауылы менән ғорурлана. Әммә улар үҙенекен генә түгел, сит йолаларҙы, сит ҡараштарҙы аҡшы аңлай, бөтә кешеләрҙә булған уртаҡлыҡтарҙы тотоп ала белә.

Ниндәй йәштә булыуға ҡарамаҫтан (балалар китаптарын өлкәндәр ҙә уҡыуы ихтимал бит), уҡыусы минең хаттарҙа яҙылғандарҙың бер өлөшө менән генә килешә икән, үҙемде бәхетле тоясаҡмын.

Кешеләр араһында, төрлө халыҡтар араһында уртаҡ фекер табыу - кешелек өсөн иң ҡиммәтле һәм әлеге ваҡытта иң кәрәкле".

Шулай итеп, киләһе һандан уҡыусыларыбыҙға ғалимдың кәңәштәрен тәҡдим итә башлайбыҙ.



## 8 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 Т/с "Художник". [12+]
15.00, 2.05 Т/с "Бахар. По имени Весна". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.45 Т/с "Василиса". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**10.45 Ҡурай даны. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус.яз.). [12+]**
**12.15, 5.00 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 Концерт ко Дню семьи. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00, 22.00 День семьи, любви и верности. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.45 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

## 9 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 Т/с "Художник". [12+]
15.00, 2.05 Т/с "Бахар. По имени Весна". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.45 Т/с "Василиса". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Ат уйнатып. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Бай. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Письма солдатам. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.15 Спектакль "Зятёк". [12+]**

## 10 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 Т/с "Художник". [12+]
15.00, 2.05 Т/с "Бахар. По имени Весна". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.45 Т/с "Василиса". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.45 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**

## 11 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 Т/с "Художник". [12+]
15.00, 2.05 Т/с "Бахар. По имени Весна". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.45 Т/с "Василиса". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ҡурай даны. [12+]**
**10.15 История одного села. [12+]**
**10.30 Дорога к храму. [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 История признания. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Д/ф "Место силы. Визит-центр "Тура-хан". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Близнецы". [12+]**

## 12 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55, 20.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". [12+]
23.50 Х/ф "Великий". [18+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
2.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
5.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.35, 21.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.00, 2.05 Т/с "Бахар. По имени Весна". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.50 Торжественная церемония открытия XXXIII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
23.55 Х/ф "Мороз по коже". [12+]
3.45 Т/с "Василиса". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.
0.25 Х/ф "После многих бед". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 18.00 Йома. [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.15, 22.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**21.00 За себя и за того парня. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**2.45 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**4.45 Это моя профессия. [12+]**

## 13 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Наше всё". [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Поехали!" [12+]
13.10 Х/ф "Не могу сказать "Прощай". [12+]
14.55 Д/ф "Правительство США против Рудольфа Абеля". Ко дню рождения легендарного разведчика. [12+]
17.00 Д/ф "Египетская сила". К 80-летию со дня рождения Бориса Клюева. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". Часть 6-я. [16+]
20.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Утраченные иллюзии". Экранизация великого романа Оноре де Бальзака. [18+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 "В кругу друзей".
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Лаборантка". [12+]
0.35 Х/ф "Знахарка". [12+]
4.10 Х/ф "Подруги". [16+]
5.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Ҡурай даны. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30 Ете егет. [12+]**
**9.15, 17.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Урал батыр. [6+]**
**11.30 Атайсал. Знай наших! [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.15 Бишек. Колыбельные моего народа.**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.30 Лесной сабантуй-2024. [12+]**
**19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.15 Х/ф "Странная жизнь Тимоти Грина". [16+]**
**2.45 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**6.00 История одного села. [12+]**

## 14 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Первый канал +2
6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя".
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.00 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.00 Д/ф "Сергей Пускепалис. "Когда меня не будет..." [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Обоюдное согласие". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
3.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать".

### РОССИЯ 1

6.05, 1.05 Х/ф "Терапия любовью". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 17.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.00 Урал батыр. [6+]**
**11.30 Атайсал. Знай наших! [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Живая аптека. [16+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Д/ф "Место силы. Визит-центр "Тура-хан". [12+]**
**18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Айгуль Сагинбаевой "Голос сердца в моих песнях". [12+]**
**0.15 Х/ф "Улыбка Бога, или Чисто одесская история". [16+]**
**2.30 Спектакль "Последние". [12+]**
**5.00 Письма солдатам. [12+]**
**5.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (2) дүшәмбе | 2:46 | 4:53 | 13:30 | 19:03 | 21:48 | 23:56 |
| 9 (3) шишәмбе | 2:47 | 4:54 | 13:30 | 19:02 | 21:48 | 23:56 |
| 10 (4) шаршамбы | 2:48 | 4:55 | 13:30 | 19:02 | 21:47 | 23:55 |
| 11 (5) кесе йома | 2:48 | 4:56 | 13:30 | 19:01 | 21:46 | 23:55 |
| 12 (6) йома | 2:49 | 4:57 | 13:30 | 19:01 | 21:45 | 23:54 |
| 13 (7) шәмбе | 2:50 | 4:59 | 13:30 | 19:00 | 21:43 | 23:53 |
| 14 (8) йәкшәмбе | 2:51 | 5:00 | 13:30 | 19:00 | 21:42 | 23:53 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Мөхәббәттә бик тиҙ уңыш яулау уның баһаһын кәметә, ә мөхәббәт юлындағы кәртәләр уның баһаһын арттыра.*

*(Стендаль).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 ИЮЛЬ - ҒАИЛӘ, МӨХӘББӘТ ҺӘМ ТОҒРОЛОҠ КӨНӨ



**Рәсәйҙә йыл һайын билдәләнгән был байрам тәүге тапҡыр 2008 йылда, илебеҙҙә Ғаилә йылы үткәндә булдырылды. РФ Дәүләт Думаһы депутаттарының тәҡдиме илдәге барлыҡ традицион дини ойошмалар тарафынан яҡлау тапты - сөнки Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөнөң конфессиональ сиктәре юҡ. Һәр диндә ғаилә тоғролоғо һәм мөхәббәтенә миҫалдар байтаҡ. Ә инде 2022 йылдың 28 июнендә Президент Владимир Путин ҡул ҡуйған документ байрам көнөн рәсмиләштерергә ярҙам итте.**

Байрам тап ошо көнгә тура килеүенең дә сәбәбе бар - тәүге тапҡыр уны Владимир өлкәһенең Муром ҡалаһы халҡы билдәләй, ә бында ирлеҡатынлы изге Петр һәм Феврония ерләнгән. Уларҙы христиандарҙа никахты һаҡлаусылар булараҡ хөрмәтләйҙәр.

Ғаилә байрамының 8 июлдә тапшырылған "Мөхәббәт һәм тоғролоҡ өсөн" иҫтәлекле миҙалы һәм гүзәл символы - аҡсәскә бар.

Был көндә Рәсәйҙең һәр төбәгендә төрлө саралар үткәрелә, байрам концерттары, ғаиләләр өсөн әүҙемлектәр ойошторола. Тап ошо көнгә тура килтереп үҙ ғаиләһен ҡорорға теләүсе йәштәр бик күп була.

Етеп килгән Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө менән гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ла тәбрикләйбеҙ! Ғаиләләргә именлек, татыулыҡ һәм быуындар бәйләнешен өҙмәй, башҡорт халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәтен, телен һаҡлап, мөхәббәт һәм тоғролоҡ, ғаилә ҡиммәттәрен күңелдәренә һеңдереп үҫер балалар ҡыуанысы теләйбеҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Суд. Сүс. Үҫмер. Өшә. Ҡом. Ағай. Ябалаҡ. Оят. Ир. Ниәт. Әни. Кәрнис. Уҡлау. Живаго. Васыят. Тайвань. Яурынбаш. Маяҡ. Балл. Мышы. Шрек. Ля. Аҙан.

**Вертикаль буйынса:** Лотфуллин. Астрология. Унтер. Өйөрмә. Ыҫмала. Дәүләткилдиев. Абышҡа. Ҡәлғә. Ниша. Сыромятников. Тюлькин. Рәссам. Латин. Ҡылыс. Таяҡ.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ТӘЛБИНӘ - ДАУАЛАУСЫ БУТҠА



**"Тәлбинә ауырыу кешенең йөрәген тынысландыра һәм хәсрәтенең бер өлөшөн ала", - тиелгән Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисендә (Әл-Бохари, Мөслим). Был бутҡаны Бәйғәмбәребеҙ яратып ашаған. Уны ҡатыны Ғәйшә йөрәк һыҙлауын тынысландырыр өсөн йыш бешергән.**

Арпа (ячмень) менән һөттән бешерелгән был ындай бутҡаны өлкәндәр ҙә, бәләкәстәр ҙә ярата. Уны ашаған саҡта эстән бөтә тән йылынған һымаҡ тойола. Арпаның файҙалы матдәләре тураһында әйтеп үтәйек. Был ҡыяҡлы үҫемлектә аҡһым (15,5 процентҡа тиклем) менән углеводтың (75 процентҡа тиклем) нисбәте бик яҡшы килөлдә. Крахмал башҡа ҡыяҡлылар менән сағыштырғанда аҙ ғына миҡдарҙа. Арпа орлоғонда В, Е, А, D витаминдары бар. Тағы ла унда файҙалы микроэлементтар араһынан кремний, фосфор, калий, кальций, магний, никель, марганец, селен, йод, цинк барлығын иҫтә тоторға кәрәк. Арпала шулай уҡ лизин менән гордецин тигән вирус һәм бактерияларға ҡаршы матдәләр бар. Улар ҙан төрлө дарыуҙар эшләйҙәр. Шуның өсөн халыҡ араһында арпа ҡайнатмаһын һәм төнәтмәһен тиреләге бөшмәк ауырыуҙарынан һәм шешектәрҙән, ашҡаҙан һәм тын алыу юлдары сирҙәренән йыш ҡулланалар.

Тәлбинә бутҡаһын бешерер өсөн беҙгә арпа оно, һөт, һыу, май, бал кәрәк буласаҡ. Арпа онон хәҙерге көндә ҙур ҡала кибеттәренән һатып алырға мөмкин йәки арпаны ҡәһүә тартҡыс аша үткәрергә була. Кәстрүлгә 400 мл һөт менән 200 мл һыу ҡойҙаҡ, өс ҡалаҡ арпа онон ҡушабыҙ. Төйөрсөктәрҙе бөтөргәнсе яҡшылап болғатабыҙ. Шунан кәстрүлде талғын утҡа ҡуйып, 5-7 минут болғай-болғай бешерәбеҙ. Бешеп сыҡҡан бутҡаға бал, әҙерәк тоҙ, һәм мотлаҡ рәүештә иретелгән һары май ҡушабыҙ. Шулай уҡ дәрсен менән кардамон тәмләткестәрен ҡушырға мөмкин. Ошо рецепт буйынса өс кешелек бутҡа килеп сығырға тейеш. Әгәр ҙә һеҙ ҡуйыраҡ йәки шыйығыраҡ бутҡа яратһағыҙ, арпа онон кәрәккәнсә өҫтәп һалырға йәки кәметергә була.

**Әлмира ӘЙҮПОВА.**

СПОРТ

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!




Башҡортостандан 25 спортсы "Рәсәйҙең спорт мастеры" исеменә лайыҡ булды, тип хәбәр итә республиканың Спорт министрлығы. Карате менән шөғөлләнгән Анна Кудрявцева "Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры" исемен алды. Шулай уҡ Алина Мостаева (бокс), Дана Бикмөхәмәтова, Екатерина Зубарева (карате), Артём Сәлимов, Роман Фазылйәнов һәм Светлана Щербина (кикбоксинг), Иллария Мирхашимова, Валерий Хоперский (пауэрлифтинг), Анастасия Казакова, Глеб Колобовников, Алексей Понитков, Эмиль Фәйзиев, Әмир Фәхретдинов, Игорь Черноусов (фехтование), Анжелика Авакумова, Динә Баязитова, Дарья Дорошко, Ксения Каширина, Элина Насибуллина, Милана Плохотина, Анастасия Соколова, Алана Тереғолова, Рамина Фәтхелисламова, Айгизә Шакирова, Мария Ярославцева (художестволы гимнастика) Рәсәйҙең спорт мастерҙары тигән исемгә лайыҡ булды.

ЯҢЫ КИТАП

# СИТ ИЛ СӘХНӘЛӘРЕНДӘ...

## ҡурайыбыҙҙы таныҡҡан ҡурайсы

**Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә донъяла милли сәнғәтте сағылдырған беренсе башҡорт музыкантының тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған "Йомабай Иҫәнбаев" тигән китап-альбом донъя күрҙе.**

Йомабай Иҫәнбаев (1891-1943) - Франция, Германия, Швеция, Бельгия, Голландия сәхнәләрендә сығыш яһаған, башҡорт ҡурайын данлаған һәм тамашасыларҙың алҡыштарын яулаған күренекле ҡурайсы. Китаптың төҙөүселәре - уның яҡташтары, күптәнән Йомабай Иҫәнбаевтың биографияһын өйрәнгән Башҡортостандың халыҡ шағиры Кәҙим Аралбаев, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев, тарихсы һәм журналист Азат Ярмуллин. Бында төрлө йылдарҙа баҫылған уникаль архив документтары, музыкант хаҡында мәҡәләләр һәм иҫтәлектәр, һирәк осраған фотоһүрәттәр ингән. Китапты музыкантҡа бағышланған шиғырҙар һәм Башҡортостан тәбиғәтенең фотопейзаждары биҙәй.



- Ниһайәт, үткән быуаттың 70-се йылдарынан алып Йомабай Иҫәнбаев тураһында йыйған материалдарым китап булып баҫылып сыҡты. Китапта XX быуат башындағы мәҡәләләр бар, архивтарҙа уникаль документтар табылған. Метрика буйынса, Йомабай Иҫәнбаев 1890 йылдың октябрендә тыуған, әммә үҙенең биографияһында ул 1891 йыл тип күрһәткән икән. Беҙ музыкант тураһында байтаҡ материалдар һәм хәтирәләр тупланыҡ. КГБ архивында 1921 йылда музыканттан һорау алыу протоколын таптыҡ. 1991 йылда Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыу уңайынан беҙ йөмәгәтселек исеменән Башҡортостан Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа Йомабай Иҫәнбаевҡа үлгәндән һуң "Башҡортостандың халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем биреүҙе һорап хат яҙҙыҡ, бындай ҡарар ҡабул ителде, Президенттың указы сыҡты, - тип һөйләй төҙөүсе Кәҙим Аралбаев.

Китапҡа яҙыусылар Рәшит Шәкүр, Сәғит Агиш, ҡурайсы Ғата Сөләймәнов, йырсы Ирма Яунзем, театр эшмәкәре Исхаҡ Зәйни, ғалим-төркиәтсе Флүр Сибәғәтов, журналист Ирек Арғынбаев, Ҡаҙағстан авторы Хәким Хәбиев һәм башҡаларҙың мәҡәләләре ингән. Шулай уҡ Резида Имашеваның Йомабай Иҫәнбаевтың ейәне Миңнулла Бикҡолов менән интервьюһы баҫылған. Ул үҙе һөнәре буйынса нефтсе булһа ла, ҡурайҙа уйнай, художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнаша.

БАССР-ҙың Мәҙәниәт министрлығы ҡарары менән 1978 йылдан алып Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға ҡурай, ҡумыҙҙа уйнау һәм өҙләү оҫталығы буйынса республика бәйгеләре үткәрелә. Быйыл августа Хәйбулла районында, Түңгәүер ырыуы йыйынында, музыкантҡа һәйкәл асылырға тейеш. Ҡурайсының тыуған ерендә китап-альбомдың исем туйы ла була.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# ҒАИЛӘ МЕНӘН ҠАРАҒЫҘ!



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры ошо көндәрҙә 104-се ижад миҙгелен ябырҙан алда тамашасыларына мөғжизәле бүләк - "Заятүләк менән Һыуһылыу" спектаклен тәҡдим итте. Ғаилә менән килеп ҡарау өсөн тәғәйенләнгән яңы тамаша башҡорт халыҡ эпосына нигеҙләнеп ҡуйылған.**

Спектаклде билдәле режиссер, Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев ҡуйҙы, ә пьесаны Мәжит Ғафуриҙың әҙәби эшкәртеүендәге эпосҡа таянып, йәш драматург Мария Малухина яҙған. Уның интерпретацияһында башҡорт халыҡ эпосы йәш кешенең үҙ юлын эҙләүе, дуҫлыҡ һәм тоғролоҡ, маҡсатҡа ирешеүсәнлек, туған-ара татыулыҡ һәм, әлбиттә, мөхәббәт тураһындағы тарихҡа әүерелде. Быға сәҡырылған белгестәр - рәссам Ася Бубнова, композитор Магуля Мезинова, хореограф Илья Оши, яҡтылыҡ буйынса рәссам Сергей Скорнецкий, визуаль эффекттар буйынса рәссам Михаил Теребиленконың оҫталығы ла булышлыҡ итте.

Ҡоро ерҙә һәм һыу аҫты батшалығында барған ваҡиғаларҙы сағылдырыу өсөн заманса технологиялар, ҡоралдар оҫта ҡулланылған. Компьютер һәм яһалма интеллект мөмкинлектәрен ҡулланып ижад ителгән бихисап матур тамашаларҙы күреп, күнегеп бөткән балаларыбыҙ күңеленә юл таба белде саҡырылған белгестәр. Шуға ла, бәлки, башҡорт халыҡ эпосы геройҙарының тышҡы киәфәттәре башҡа халыҡтарҙың йәнһүрәттәрҙә көүҙәләндерелгән мифик заттарына ла оҡшап киткәндәй тойолдо. Сәхнәгә күтәрелгән һәр актер тәү минуттарҙан уҡ тамашасы иғтибарын яулай һәм үҙе артынан әкиәт донъяһына илтә алды.

Әйткәндәй, төп ролдәрҙе йәш актерҙар Линар Бәйгетов (Заятүләк) һәм Айым Сөләймәнова (Һыуһылыу) башҡарҙы. Улар был сағыу спектаклдә эшләүе ҡыҙыҡлы булыуын, үҙ ролдәрен оло яуаплылыҡ менән уйнауҙарын телгә алды. Шулай уҡ спектаклдә Хөрмәтулла Үтәшев - Диңгеҙхан батша, Алмас Әмиров - Йәнозаҡ вәзир, Алһыу Гәлина - ханбикә, Урал Әминов, Артур Кәбиров һәм Артур Ҡунаҡбаев - ағалы-ҡустылы ендәр, Гөлнара Ҡаҙаҡбаева - мәсекәй әбей, Юнир Ҡоланбаев - аждаһа, Айнур Ситдиҡов - толпар, Зилиә Хәлилова - өкө, Руслан Гәлимов - алабуға, Айҙар Шәмсетдинов - Байназар ролдәрен башҡарҙы.

Диңгеҙ төбөндәге төрлө тереклекте лә оҫта көүҙәләндерҙе артистар. "Бик борон ижад ителеүенә ҡарамаҫтан, "Заятүләк менән Һыуһылыу" башҡорт халыҡ эпосы бөгөн дә актуаль - ул мөхәббәт, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, тормошобоҙҙоң әхлаҡи нигеҙҙәре тураһында. Пьеса авторы Мария Малухина һәм ҡуйыусы төркөм менән беҙ серле һәм ғәжәйеп һыу аҫты батшалығын яңыса күрһәтергә, ғаилә менән килеп ҡарарлыҡ спектакль эшләргә теләнек", тине ҡуйыусы режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев", -тип хәбәр иткәйне театрҙың матбуғат хеҙмәте. Ижади төркөмдөң был ниәте тормошҡа ашыуына премьераны килеп ҡараған һәр тамашасының театрҙан йөҙө балҡып, күтәренке кәйеф менән сығыуы дәлил. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының был спектакле лә сәхнәнән оҙаҡ төшмәҫ, моғайын.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН ЕРҘӘ ЯТҺА ЛА...

## тут теймәй

Баш ҡәрҙәш булһа ла, мал ҡәрҙәш түгел.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙың буй еткеһеҙ булып күренеүе - ул уның матурлығын арттырыусы тағы бер бер биҙәнгес әйбер кеүек.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Мөхәббәттә бик тиҙ уңыш яулау уның баһаһын кәметә, ә мөхәббәт юлындағы кәртәләр уның баһаһын арттыра.

**(Стендаль).**

Шайтандың мөхәббәтте емереү өсөн уйлап тапҡан иң һәҙөмтәле һәм ышаныслы ысулы - ул мыжыҡлыҡ. Был сара әле үҙ эшен эшләмәй ҡалғаны юҡ. Ул йылан сағыуына тиң.

**(Дейл Карнеги).**

Ожмахта нимә эшләгәндәрен беҙ белмәйбеҙ. Уның ҡарауы, ожмахта өйләнмәйҙәр һәм кейәүгә сыҡмайҙар икәнен беләбеҙ.

**(Джонатан Свифт).**

Батшалар һәм ҡатындары хыянат иткән ирҙәр бар халыҡтың уларҙың йәҙәнән көлгәнен иң һуңғы булып белә.

**(Наполеон Бонапарт).**

Дуҫтар менән күҙмә-күҙ әңгәмәләшкәндә, аҡыл әйләре бик ябай фекерҙәр әйтә, сөнки дуҫ менән һөйләшеү - ул ҡысҡырып уйлау.

**(Джозеф Аддисон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер әсә Аҡһаҡал янына килә һәм уға шундай һорау бирә:**

**- Хөрмәтле Аҡһаҡал, мин үҙемдең улым тураһында өҙләкһеҙ борсолоу кисерәм. Балам ниндәйҙер бәләгә осрап ҡуймаһын, тигән уй эҙәрләкләй мине. Миңә ни эшләргә икән?**

**- Яуап бик ябай: улыңа насарлыҡ теләүҙән тукта! - ти Аҡһаҡал. - Эш шунда: һинең башыңда уралған уйҙарҙы Йыһан теләк рәүешендә ҡабул итә. Балалар үҙҙәре лә атаәсәнең уға ҡарата булған теләктәрен, уйлағандарын йәшәү программаһына һала. Шуның өсөн улыңа мөнәсәбәтеңде үҙгәрт. Уның тураһында тик яҡшыны ғына уйла. Уға юлында осраған бар кәртәләрҙе еңеп сығырға һәләтле иң көслө, аҡыллы, лайыҡлы кеше итеп ҡара...**

**Аҡһаҡалдың әйткәндәрен тәрән уйға ҡалып тыңлап торғандан һуң, әсә китә. Уның артынса Аҡһаҡал шулай ти:**

**- Кешенең төп дошмандары - яҡындары шул инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2750
Заказ - 1103